ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

19-25 июль (майай) 2024

№28 (1121)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шаҡҡатырғыс хаҡтар!**



2-3

**Башҡорттоң милли кейеме...**

динебеҙ талаптарына ла тап килә



6

**Башҡорттар һәм калалар,**

йәки Сал тарихтан хәҙерге заманға сәйәхәт



8-10

**Шәкүр йөрәге...**

"Халҡым!" тип һулҡылдап типте



11-12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Кем үҙ йәне кимәлендәге тормош сифаты юғарылығына өлгәшә - шул бәхетле. Кем үҙен ҡурҡыуҙар төрмәһенән ҡотҡара - шул бәхетле. Кем борсолоуҙарынан ҡотола, кем насар кәйефен еңә һәм кем үҙ имгәнеүҙәрен иҫкәртә - шул бәхетле. Кем хис-тойғолар диңгеҙендә һиллеккә өлгәшә - шул бәхетле. Һеҙ ошо диңгеҙҙә йөҙөп сыға алырһығыҙмы, әллә диңгеҙ төбөнә китерһегеҙме? Барыһы ла үҙегеҙҙең ҡулда!*

***Аугусто КЮРИ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халҡыбыҙ быуаттар буйына ергә аҫабалыҡ хоҡуғы менән файҙаланған. Ситтән килтерелгән һалма аҙыҡ-түлек заманында экологик таҙа ризыҡты үҙең үҫтереп, ғаилә аҫрарлыҡ ерең бармы бөгөн?

***Рәлиф СӘЙФЕТДИНОВ, Бүздәк Крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы, "Бәрәкәт-Агро" теплица комплексының генераль директоры:*** Халҡыбыҙ телендә шундай ҡанатлы һүҙ бар: ҡайҙа тыуғанһың - шунда кәрәкһең. Мәктәпте тамамлағас, юрист һөнәренә тәүҙә - колледжда, унан һуң БДУ-ның юридик факультетында уҡыным, ләкин юрист булып эшләргә тура килмәһә лә, артабанғы эшемдә уҡыған һөнәремдең бик тә кәрәге тейеп кенә тора. Мин тыуып-үҫкән еремә - Бүздәгемә ҡайтып, үҙ эшемде асырға ҡарар иттем һәм йәшелсә үҫтереү йүнәлешен һайланым, сөнки, беренсенән, был минең өсөн бала саҡтан таныш эш: атайым 1994 йылдан алып ошо тармаҡ буйынса эшләне. Баҡса тултырып кишер, сөгөлдөр, һуған, һарымһаҡ сәсте, аҙағыраҡ теплица ҡороп ебәрҙе һәм эшен ябыҡ грунтта ла дауам итте. Икенсенән, атайымдың эшен дауам итке килде, юғиһә, үҙебеҙ тәпәй баҫып үҫкән еребеҙ етемһерәп буш ятһынмы, йә булмаһа, ситтәр килеп уға хужа булырға тейешме?

Әйткәнемсә, атайымдың ере бар ине, мин шунда теплица ҡороп, йыл әйләнәһенә уңыш алыу ниәте менән эш башлап ебәрҙем. Тик шулай ҙа ярҙам кәрәк ине, әлбиттә, сөнки үҙ иҫәбеңә генә фермерлыҡ эшен башҡарып сығыуы ауыр мәсьәлә. Күп уйлап тормай, мин 2020 йылда яңы эш башлаусы фермерҙарға дәүләт ярҙамы программаһында ҡатнашып, 2,9 млн грант яулауға өлгәштем. Был иһә ер биләмәһен тағы ла киңәйтеп, алдынғы технологиялар менән эшләүсе стационар теплица төҙөргә мөмкинлек бирҙе. Шунан әкренләп эштәр алға барҙы. Бөгөн минең "Бәрәкәт-Агро" комплексы - гектар самаһы ерҙә йыл әйләнәһенә хуш еҫле ҡыяр һәм башҡа төр йәшелсә үҫтереүсе ябыҡ биләмә, ерҙең квадрат метрынан 160-180 кг уңыш алабыҙ. Ҡыярҙы заманса махсус голланд системаһы буйынса үҫенте һабаҡтары үрмәләп үҫһен өсөн ҡуйылған бейек конструкциялар (шпалерҙар) ярҙамында, идара ителеүсе микроклимат булдырып, түтәлдәрҙе тамсылап һуғарыу ысулы менән үҫтерәбеҙ. Башҡортостаныбыҙ ерҙәргә бай, ләкин беҙҙең яҡтарҙа, шөкөр, әрәм булып, хатта ҡуртымға алырлыҡ та буш ятҡан ерҙәр юҡ.



Миңә Урал аръяғы райондарында булып ҡайтырға тура килгәйне, унда иһә йәйрәп ятҡан иркенлек, күп урындарҙа ер биләмәләре буш ята, уларҙы ҡый үләндәре, әрәмәлек, йәш ағас үҫентеләре ҡаплап алып бара. Ниндәй ерҙәр! Нимә теләйһең, тот та сәс! Ана шул етемһерәп ятҡан ташландыҡ ерҙәрҙе күреп, йәнем әрнене. Ер-Әсәбеҙ, тибеҙ икән, ул бит уңыш тыуҙырырға, кешеләрҙе туйындырырға, һөйөндөрөргә тейеш. Дөрөҫ, был яҡтар алтынға ла, баҡырға ла, тигәндәй, ҡаҙылма байлыҡтарға бай, шуның өсөн дә ерҙең бында айырыуса ҡәҙерен белеп, уны әрһеҙ ер соҡоусылар баҫып алмаһын, ер йөрәген йыртғыслап, уны яфаламаһын өсөн үҙебеҙгә файҙаланырға, уңыш үҫтерергә кәрәк, тип уйлайым, сөнки законлы рәүештә ергә хоҡуғыңды нығытып, дәүләт ярҙамында иген йә башҡа төр бөртөклөләр сәселгән биләмәгә ҡомһоҙҙар ҡул һуҙырға баҙнат итмәҫ ине.

Һеҙҙең һорауҙа әйтелгәнсә, экологик таҙа ризыҡ етештереү - бөгөнгө көн талабы бит, юғиһә, картуфтың картуфын да бит ҡайҙандыр ситтән - Мысырҙан, Израилдән ташыйҙар. Буш ятҡан ерҙәргә картуф сәсеп кенә лә бөтөн республиканы үҙебеҙҙең тәмле, таҙа ризыҡ менән тәьмин итергә була, тип уйлайым, тик берләшеп, коллектив фермер хужалыҡтарына ойошоп эшләү отошлораҡ. Үҙемдән сығып, ошо йүнәлештә эш башлаусыларға, иң мөһиме - ер булһын да, теләк булһын, тип өндәшер инем. Республика Ауыл хужалығы министрлығы бындай башланғыстарҙы ҡуш ҡуллап ҡаршылай, ярҙам итергә һәр саҡ әҙер тора. Тағы шуны әйткем килә: ерҙә эшләүгә йәштәрҙе ылыҡтырырға, ҡыҙыҡһындырырға кәрәк, юғиһә, беҙҙән һуң ерҙәребеҙгә кем хужа булып ҡалыр?...

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҒАИЛӘ ИПОТЕКАҺЫ АЛ!



**Яңы төҙөлгән йортта фатир һатып алыу йәки шәхси йорт төҙөү өсөн 6 процент ставкаһы менән ғаилә ипотекаһы 2030 йылға тиклем оҙайтылды, тип хәбәр иттеләр Рәсәйҙең Финанс министрлығынан.**

Программа алты йәшкәсә балаһы булған ғаиләләргә ҡағыла. Алыҫ Көнсығышта йәшәүселәр өсөн дә программа буйынса ставка - 6 процент. Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе, шулай уҡ Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһендә йәшәүселәр өсөн кредиттың суммаһы - 12 миллион һумға тиклем. Башҡа төбәктәрҙә иһә 6 миллион һумғаса. Беренсе иғәнә 20 процент тәшкил итә. Бала тыуған осраҡта элек бирелгән кредитты отошло шарттары булған яңы займ алып түләргә (рефинанслауға) рөхсәт ителә. Бынан тыш, яңы төҙөлгән йорттарға ғаилә ипотекаһын түбәндәге ғаиләләр алырға мөмкин: бәләкәй ҡалаларҙа (50 меңгә тиклем кеше) йәшәгән һәм ике балиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләр; төҙөлөш күләме түбән төбәктәрҙә йәки шәхси үҫеш программалары булған төбәктәрҙә йәшәгән, ике балиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләр; инвалид бала ҡараған ғаиләләр. Бер генә льготалы кредит алырға мөмкин - бынан алдараҡ бирелгән льготалы ипотека кредиттары иҫәпкә алына.

12+

✓ *Ямғыр канализацияһы һәм таҙартыу ҡоролмаларына ҙур иғтибар бүленһә ине. Һуңғы ваҡытта баш ҡалаға ябырылған ҡойма ямғырҙар Өфө урамдарын оло һыуҙан ҡотҡара алмағаны күҙгә ташланды.*



БАШ ҠАЛАМ



# ЫҢҒАЙҘАРЫ ИШӘЙӘ, ӘММӘ...

**Бейек тау башында урынлашҡан, төрлө яҡтан йылғалар менән йыуылған күркәм баш ҡалабыҙ үҙенсәлекле лә, мөһабәт тә, матур һәм заманса ла йәшәү урыны. Оҙаҡламай Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ, һәм беҙ ошо ваҡиғаның шаһиттары булыу менән икеләтә бәхетлебеҙ.**

Ошо сара алдынан Өфө ҙур төҙөлөш майҙанын хәтерләтә: йорттар, социаль һәм спорт объекттары төҙөлә, юлдар төҙөкләндерелә, яңы райондар барлыҡҡа килә. Йәй миҙгелендә был эшмәкәрлек тағы ла әүҙемләшә төшөүен баш ҡалала йәшәүсе һәр кем асыҡ тоя, сөнки унда-бында урамдар ябыла, юлдар ситендә һыу һәм йылытыу торбаларын тикшереү өсөн ҡаҙылған соҡорҙар һаны арта, төҙөлөш транспорты геүләп тора. Ошондай эштәр барышында ямғыр канализацияһы һәм таҙартыу ҡоролмаларына ҙур иғтибар бүленһә икән, тигән теләк менән яҙам. Һуңғы ваҡытта баш ҡалаға ғына түгел, ә тотош республикаға ябырылған ҡойма ямғырҙар Өфө урамдарын оло һыуҙан ҡотҡара алмағаны күҙгә ташланды.

Ҡала маршруттарында йөрөү өсөн хаҡ артты, тип зарланғандар бар. Бөтә өлкәлә лә хаҡтар артыуы барғанда, бензин көндән-көн ҡыйбатланғанда, "Башавтотранс" компанияһына был юлға бармайынса мөмкин дә булмағандыр. Ләкин компания етәкселеге үҙенең файҙаһы тураһында ғына түгел, ә автобуста йөрөүсе халыҡ хаҡында ла уйлаһа ине әҙерәк. Күпселек автобустарҙа кондиционер эшләмәй, пассажирҙар ғына түгел, хатта водителдәр ҙә эҫенән йонсоп бара. Был, минеңсә, пассажирҙарҙың хәүефһеҙлеге өсөн бик ҡурҡыныс. Ошо хәлгә иғтибар бүленһә ине.

Дөйөмләштереп әйткәндә, Өфөлә килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеү өсөн күп эштәр башҡарыла, шул уҡ ваҡытта иғтибар бер йүнәлештә генә түгел, ә төрлө өлкәне үҙ эсенә алһа, тағы ла яҡшы буласаҡ, тип кенә әйтмәксе инем.

**Зәбир СӨНӘҒӘТУЛЛИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халкыбыҙ быуаттар буйына ергә аҫабалык хокуғы менән файҙаланған. Ситтән килтерелгән яңалма аҙык-түлек заманында экологик таҙа ризыкты үҙең үҫтереп, ғаилә аҫрарлык ерең бармы бөгөн?***

***Наил БАЙҒУСҠАРОВ, Хәйбулла район хакимиәте башлығының иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм инвестициялар буйынса урынбаҫары:*** Ғаиләһен генә түгел, тотош районды тотоп торған данлыҡлы фермерҙар байтаҡ бөгөн. Шундай тырыш һәм маҡсатына ынтылышлы эшҡыуарҙарҙың береһе беҙҙең Хәйбуллала ла бар һәм уның хеҙмәте республикала яҡшы билдәле. Татыр-Үҙәк ауылы егете, урындағы Крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе Урал Закиров ысын мәғәнәһендә ер кешеһе, бәғзе берәүҙәр кеүек, ул күп аҡса артынан ситкә китеү яғын ҡараманы, бәхетен тыуған ерендә тапты. Уның хужалығы 2008 йылдан бирле игенселек менән шөғөлләнә, шул уҡ ваҡытта малсылыҡ тармағын да үҫтерә. Әлбиттә, уңыш еңел генә бирелмәй. Урал Әзһәр улы ла үҙ эшен ни бары 150 гектар ерҙә башлап ебәргәйне, уның ҡарауы, хәҙер хужалыҡ ҡарамағында 5 мең гектарға яҡын ере бар. Ер ҡәҙерен белеп, үҙен тыуған еренең ысын хужаһы итеп тойған тырыш игенсе һәм малсылыҡ коллективы йылдан-йыл яҡшыраҡ һөҙөмтәләргә өлгәшә. Былтыр, мәҫәлән, фермер Урал Закиров 2023 йылғы уңыш йыйыуҙа яулаған юғары хеҙмәт һөҙөмтәләре буйынса республика конкурсында еңеүсе 30 фермер иҫәбенә сыҡты һәм "Лада Нива" автомобиле менән бүләкләнде. Фермер хужалығының ҡеүәттәре үҫә бара: бөгөн уның малсылыҡ фермаһында 220 баш һыйыр малы аҫрала, ауыл хужалығы техникаһы паркы булдырылды, иген таҙартыу комплексы, икмәк бешереү пункты һәм ашханаһы бар. Бөтә был уңыш үҙенән-үҙе генә килмәй, әлбиттә. Фермерҙар бөгөн әүҙем дәүләт ярҙамына таянып эшләй. Урал Закиров та шулай уҡ "Ғаилә малсылыҡ фермалары үҫеше" республика программаһы сиктәрендә грант ярҙамына лайыҡ булды һәм был аҡсаға JM-200 тракторы менән 23 баш эре мал һатып алды.

Улар үҫтергән иген һәм башҡа төр бөртөклөләр республика район һәм ҡалаларына һатыла, пай ерҙәре хужалары ла тәьмин ителеп тора. Үҙ еренең патриоты өсөн өлгәшелгәндәр сик түгел. Тыуған еребеҙҙең матурлығын, камиллығын, байлыҡтарын башҡалар ҙа күреп һоҡланһын, уның ҡәҙерен белһен өсөн, шулай уҡ еребеҙгә һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү маҡсатында Урал Әзһәр улы яңы пландар менән киләсәккә ҡарап йәшәй: ауыл хужалығы етештереү һәм туризм тармағын үҫтереү буйынса конкурста ҡатнашып, грант ярҙамы алыу һәм ауыл туризмын ойоштороп ебәреү ниәте менән яна. Хакимиәттә үткәрелгән "Эшҡыуарлыҡ сәғәте"ндә беҙ уға үҙенең бизнес-проектын тормошҡа ашырыу маҡсатында эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса муниципаль программала ҡатнашырға тәҡдим иттек, һәм уңған фермер был маҡсатына ла ирешер, тигән өмөттәбеҙ.

КӨНАУАЗ

# ШАҠҠАТЫРҒЫС ХАҠТАР!

**Килоһын 100 тәңкәгә картуф һатып алғанығыҙ бармы, йәмәғәт? Ә мин - юҡ, Өфөнөң "Перекресток" магазинында ошондай хаҡ ҡуйылған һап-һары эре генә картуфҡа ауыҙ асып теклəп торғайным былай: әллә "алтын" йәшелсәме был, тип... Ҡәҙимге картуф булып сыҡты, әмәлгә ҡалғандай, кис эштән ҡайтышлай, ҡыҙым бер моҡсай һатып алып та ҡайтҡан.**



Эйе, бер тигеҙ матур бүлбеләр, яңы уңыш - Әзербайжандан килтерелгән. Ғәҙәттә, яңы картуф тиҙ бешә, ашап туйғыһыҙ була. Үҙебеҙҙә үҫкәне. Ә 100 тәңкәлек сит ил уңышының бешкәнен сәғәттән ашыу көтөргә тура килде. Кем белә, бәлки, ул яҡта тупраҡ та икенсерәктер, сорты ла шундай һерелер. Ни булһа ла, матур күренеп ятҡан был картуфты тағы барып алырға теләк ҡалманы. Ә инде хаҡына килгәндә, аптырарлыҡ та түгел: беренсенән, яңы уңыш һәм ситтән килтерелгән; икенсенән, йәшелсәгә бындай хаҡтар "ғәҙәти" булып бара беҙҙә бөгөн. Шулай ҙа Росстат мәғлүмәттәренә күҙ һалғандан һуң, халыҡтың төп ризығы - "икенсе икмәк" тип йөрөтөлгән картуфтың июнь айы эсендә генә лә 26 процентҡа ҡимммәтләнеүен "ғәҙәти" хәл тип әйтергә бер ҙә тел әйләнмәй, әлбиттә.

Ниһайәт, килограмы 300-350 һумлыҡ помидорҙар менән 170 һумлыҡ ҡыярҙарҙы ла күрергә тура килде быйыл йәй. "Борщ йыйылмаһы"на ингән кишер менән сөгөлдөр хаҡы ла бит күптән инде йөҙгә яҡынланы: тәүгеһенеке 5,2 процентҡа артып, уртаса 60 һум торһа, икен-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республикала уңыштың ниндәй булыры хаҡында һөйләне. Фәзрахманов һүҙҙәренсә, "иген һәм майлы культураларҙан бик яҡшы уңыш" көтөлә, уны ваҡытында йыйып алырға ғына кәрәк. Ураҡты ошо арала ужым арышы һәм бойҙайҙан башларға әҙерләнәләр. Ямғыр күп яуғас, техник культураларҙан да яҡшы уңышҡа өмөтләнәләр.

✓БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров республика делегацияһының августың икенсе яртыһында эш сәфәре менән Үзбәкстанға барырға йыйыныуы тураһында әйтте. Башҡортостан делегацияһы Ҡарағалпаҡстандың баш ҡалаһы Нукусҡа юллана, унда килешеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу буйынса аныҡ аҙымдар тикшерелә. Уҙған аҙнала Өфөгә Ҡарағалпаҡстандың Юғары Советы рәйесе Аманбай Орынбаев килде. Туризм, нефть химияһы, ауыл хужалығы һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр төҙөлдө.

✓Республикала тәү сиратта ремонт талап ителгән юлдарҙы төҙөкләндереү программаһы Башҡортостан Башлығы ҡушыуы буйынса 2023 йылда старт алды. Исемлеккә 29 районда ғы һәм ике ҡалалағы 80 проблемалы объект индерелгән. Шул уҡ ваҡытта уларҙың 48-е бер нисә йылға иҫәпләнгән, был объекттарҙағы эштәр 2025 - 2026 йылдарҙа тамамланасаҡ. Дөйөм оҙонлоғо 215 км булған автомобиль юлдарын һәм урам участкаларын норматив хәлгә килтереү, шулай уҡ оҙонлоғо 325 погон метр булған биш күперҙе ремонтлау планлаштырыла.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса ведомство-ара комиссия ултырышын үткәрҙе. Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының Башҡортостан буйынса идаралығы начальнигы Владимир Севастьянов хәбәр итеүенсә, 2024 йылдың алты айында юл-транспорт һәләкәттәре һаны уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 20 процентҡа, 1 256 осраҡҡа тиклем, кәмегән. Зыян күреүселәр һаны 18,5 процентҡа кәмегән, ә һәләк булыусылар, киреһенсә, 22 процентҡа артҡан.

✓22-нә тиклем "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы сиктәрендә табиптар Кушнаренко, Саҡмағош, Борай, Мәләүез, Балаҡатай, Бәләбәй, Баймаҡ районларында була. Акция барышында белгестәр Башҡортостандың 181 тораҡ пунктында 102 683 тикшереү үткәрә.

✓ Донъя мәғлүмәт сығанаҡтары ишараһы яҡшы аңлашыла: Трампҡа тип тәғәйенләнгән пуляның Байденға килеп "тейеүе" бик ихтимал, сөнки был һөжүм президентлыҡҡа көрәш барышын экс-президент файҙаһына бороп ебәрергә мөмкин.



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халҡыбыҙ быуаттар буйына ергә аҫабалыҡ хоҡуғы менән файҙаланған. Ситтән килтерелгән яһалма аҙыҡ-түлек заманында экологик таҙа ризыҡты үҙең үҫтереп, ғаилә аҫрарлыҡ ереңбармы бөгөн?***

***Тәнзилә ЗӘЙНУЛЛИНА, йорт хужабикәһе, Ҡырмыҫҡалы районы:*** Атайым мәрхүмдең әйткән һүҙе бар ине: "Бына минең кеүек пенсияға сыҡҡас, кейәү менән ошонда ҡайтып торорһоғоҙ. Өй әле ныҡ, һеҙҙең ғүмергә етерлек; ерем иркен , ундырышлы: нимә теләйһең - сәс, үҫтер. Мин уны кемгә ҡалдырып китәм? Ҡайт, ҡалаҙа ятма химия еҫкәп", - тиер ине миңә ялға ҡайтҡан һайын. Йәшерәк сағымда көлөп кенә ҡуя инем, атайым менән әсәйем дә әле йәшәрҙәр, үҙем дә ҡартаймаҫ кеүек инем. Ә ул һиҙҙермәй генә килде лә етте - ҡартлыҡ. Ерҙә эшләрмен, тип тә уйламаным: бала саҡта күп бил бөгөлдө инде: картуфын да, башҡаһын да үҫтерҙек, колхоздың йәйрәп ятҡан сикһеҙ сөгөлдөр баҫыуын да утаныҡ... Башҡаса ергә бил бөгөү юҡ, ҡалала рәхәттә әҙергә генә йәшәрмен, тип уйлай инем йәшлек дыуамаллығы менән. Тик бына ҡалала әҙерләп ҡуймағандар ине шул... Ирем менән химия заводында ла, башҡаһында ла эшләргә тура килде, тын юлы быуылды, үпкәләр тонсоҡто. Ә эшләргә, йәшәргә, балаларҙы аҫрарға, уҡытырға кәрәк ине. Бәхеткә, балалар үҙ юлдарын тапты, башлы-күҙле булды.

Шулай итеп, пенсияға сыҡҡас та тыуған ергә, хужаһыҙ етемһерәп ултырған атай йортона ҡайтып төштөк. Бындағы ер! Мамыҡтай күпереп ята, кем әйтмешләй, тот та икмәккә һыла. Атайым бик егәрле кеше булды шул: тәрбиәләп, ашлап ҡына тотҡанлыҡтан, байтаҡ йылдар үтһә лә ташландыҡҡа әйләнеп өлгөрмәгән ине әле. Картуф ере иңләп сыҡҡыһыҙ, тик был беҙҙе ҡурҡытманы: ер эшенә ҡулдар һыуһаған булып сыҡты. Уның ҡарауы, тәүге йыл уҡ уңышын ҡайҙа ҡуйырға ла белмәнек. Атайым элек үҙенән артып ҡалған уңышын район үҙәгендәге ашханаға илтеп һатҡанын белә инем, тик хәҙер ул күптән ябылған. Уның ҡарауы, хәҙер унда кафе асылған. Килешеү төҙөп, картуф һәм йәшелсәнең бер өлөшөн - кафеға, ҡалғанын баҙар йәрминкәләрендә һатып бөтөрҙөк. Ауылдаштар араһында ла хәҙер картуф сәсмәгән кешеләр күбәйгән, улар ҙа бик яратып һатып ала беҙҙең уңышты.

Шулай итеп, ерҙә эшләү беҙҙе етер-етмәҫ пенсияға күҙ терәп тороуҙан ҡотҡарҙы: асыҡ һауала эшләп, экологик таҙа ризыҡ менән туҡланыу сәләмәтлекте лә нығытты. Быны өсөн иң тәүҙә тыуған еремә, йәнә лә атайыма рәхмәтлемен: бәләкәйҙән тыуған тупрағында эшләп үҫкән баланың барыбер ошо үҙ еренә әйләнеп ҡайтасағын белеп, донъяһын ер биләмәһе менән тәрбиәле итеп ҡарап, ҡалдырып киткәне өсөн. Еребеҙҙең ҡәҙерен беләйек, хәстәрлеккә хужа булайыҡ, уны ситтәргә ташлап китмәйек - Ер рәнйер. Еребеҙгә бил бөгөүҙән ҡурҡмайыҡ - ул беҙгә мотлаҡ рәхмәтле генә буласаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

---

сеһе 2,72 процентҡа ҡиммәтләнеп, 67-70 һум тәшкил итә. Ә бына тәүге ярты йыл эсендә шул уҡ сөгөлдөрҙөң икеләтә-өсләтә ҡиммәтләнеп (95 процент!), рекорд ҡуйыуы ҡайһы берәүҙәрҙең ҡеҫәһенә лә һуҡҡандыр, ихтимал. Бынан тыш, икмәккә, араҡыға, пассажирҙар транспортына, бензинға хаҡтарҙың да әсе ҡамырҙай ҡабарыуын ҡушһаң әгәр.

Был нимә әле ул, бына 1 июлдән ҡайһы бер тауар һәм хеҙмәттәргә лә шаҡҡатырғыс хаҡтар индерелде бит. Иң борсолдорғаны - торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың сираттағы артыуы. Был инде беҙҙең йәшәйештең туҡтау белмәй торған "мәңгелек двигателе". Дөйөм алғанда, коммуналь хеҙмәттәр 10 процент самаһына ҡиммәтләнә, ләкин уға был индекстан тайпылыуы рөхсәт ителгән иң сикке күрһәткес 4,9 процент өҫтәлеүе мөмкин. Интернет сығанаҡтар яҙыуынса, айырыуса газға хаҡ нык арта. Илебеҙ газға бай, тибеҙ, уны ҡайҙа ҡуйырға белмәйҙәр, ләкин халыҡ өсөн ул йылдан-йыл ҡиммәтерәккә төшә, юғиһә "Газпром" менеджерҙарына миллионлаған айлыҡ эш хаҡын кем тәьмин итер һуң!

Хәйер, Рәсәй төбәктәренең һәр береһе хаҡтарҙы үҙе көйләйәсәк. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһы Башлығының былтырғы 13 декабрь ҡарары менән 2024 йылға граждандар тарафынан коммуналь хеҙмәттәргә түләү хаҡының артыу индексы 13,6 процент тип билдәләнгәйне. Шунан сығып, быйыл 1 июлдән республикала һыу менән тәьмин итеү - 12,4, һыу үткәреү - 12,6, йылылыҡ менән тәьмин итеү - 10,9, электр энергияһы - 8,7, газ 11,2 процентҡа арта, тип хәбәр итте БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы. Күренеүенсә, ҡулланыу хаҡтарының артыуы былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда быйыл июндә 8,75 процент кимәленә барып етте. "Дүрт аҙна рәттән инфляцияның ағымдағы кимәле күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән ашып китте. Хаҡтарҙың был тиклем үргә һикереүе юғарғы идара даирәләрендә көрсөккә ҡаршы ашығыс саралар күреү хаҡында фекер алышыуҙарға сәбәпсе булды һәм Рәсәй Банкына төп ставканы 17-20 процентҡа (!) күтәреү мәсьәләһен ҡуҙғатып алды хатта", - тип яҙҙы Макроиҡтисад анализы үҙәгенең баш эксперты Дмитрий Белоусов. Ә бит йыллыҡ кимәлдә алып ҡарағанда, инфляция 8,7 процентҡа күтәрелһә, ошо уҡ йылдың башынан хаҡтар 3,82 процентҡа артты. Үҙәк Банк инфляцияны һис бер нисек тә йүгәнләй алмай. Үҙәк Банкка йыл аҙағына инфляцияның 4 процентҡа төшөүенә өлгәшеү өсөн хаҡтарҙың июлдә тотороҡланыуы ла етәсәк, ләкин Э. Нәбиуллина ведомствоһының был миссияны үтәй алмаяғы көн кеүек асыҡ. Шуға ла йыл аҙағына инфляция ихтималлығы кимәле ҡайтанан ҡаралып, ул 6,5 процент самаһы булыр, тип фаразланды, әммә киләсәк ни күрһәтерен бер Аллаһ ҡына белә...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

---

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҮЛЕМДӘН - БЕР САНТИМЕТР



**Үткән аҙнаның һуңғы ике көнөндәге ваҡиға донъя кимәлендә, шул иҫәптән интернет селтәрендә ҙур шаңҡыу булды: үҙенең һайлау алды осрашыуҙарының береһе - Пенсильвания штатында үткән митингыһы ваҡытында АҠШ-тың элекке президенты Дональд Трампҡа һөжүм итеү тураһында хәбәрҙәр киң мәғлүмәт теленән төшмәне.**

Күп һанлы халыҡ алдында сығыш яһап торған Трамп ҡолағынан ҡолаҡ ҡаға яҙҙы. Ярай әле, һуңғы ваҡыттағы һәр төрлө эҙәрлекләүҙәрҙән һиҙгерләге үткерләнгән экс-президент яралы ҡолағын баҫып, трибуна артына боҫоп өлгөрҙө. NewYork Post яҙып сығыуынса, ошоға тиклем Трампҡа ниндәй генә янауҙар ишетергә тура килмәне. Уны законһыҙ юл менән президент булыуҙа ғәйепләнеләр, демократия дошманы итеп күрҙеләр, уға агенттар легионын һөсләтеп, өйөн тентенеләр, эшмәкәрлеген тикшерҙеләр, ниндәйҙер ғәйеп-яла яҡтылар, судҡа йөрөттөләр һәм төрмәгә ябырға теләнеләр. Хәҙер иһә уны үлтерергә маташтылар. Ләкин шул ваҡытта ла Трамп үҙен ысын көрәшсе итеп күрһәтә алды. Америка флагы янында бите буйлап ҡаны ағыуға ҡарамаҫтан, йоҙроҡ төйөлгән ҡулын күтәреп, өс тапҡыр "Көрәшергә!" тигән оран ташланы.

Эйе, Американың уң көстәре властарҙы һөжүм ойоштороуҙа ғәйепләһә, үҙәк көстәр хәлде ҡатмарлаштырмаҫҡа һәм был ваҡиғаны артабан да көс ҡулланыуға ҡарата аҡланыу итеп файҙаланмаҫҡа саҡырҙы. Ә бына ҡыҫҡырып әйтелмәһә лә, бөтәһе лә бер уйҙа ине: асыҡтан-асыҡ һөжүм Трампҡа президент ҡәнәфиййен ҡайтарырға, Аҡ йортҡа икенсе тапҡыр әйләнеп ҡайтырға ярҙам итеүе бик ихтимал. Донъя лидерҙары Орбан, Си Цзиньпин, Моди, Боррель, Макрон һәм башҡалар был көс актын ҡырҡа ғәйепләп сыҡтылар. Ни тиһәң дә, бер кешенең үлеме, икеүһенең яраланыуы уйын эш түгел бит. Хатта президент Джо Байден да махсус белдереү яһарға мәжбүр булды.

Әммә донъя мәғлүмәт сығанаҡтары ишараһы яҡшы аңлашыла: Трампҡа тип тәғәйенләнгән пуляның Байденға килеп "тейеүе" бик ихтимал, сөнки был һөжүм һәм унда Трамптың иҫән ҡалыуы президентлыҡҡа көсөргәнешле көрәш барышын экс-президент файҙаһына ҡырҡа бороп ебәрергә мөмкин. Тик бына шуныһы: был һөжүмдең тәүге шауҡымы бер аҙ тарала төшкәс, уңайһыҙ һорауҙар килеп тыуыуы ла бар бит әле: сәйәсмәнде юҡ итеү планына демократтарҙың ҡыҫылышы бармы? Ә шулай ҙа ваҡиғаны тикшереү барышында иң беренсе сиратта вип-персонаның тән һағы хеҙмәтенә һорауҙар күп буласаҡ, сөнки һаҡ хеҙмәте бындай йыйылыш буласаҡ урынды, айырыуса объектҡа ҡаршылағы урындарҙы, ҡыйыҡ баштарын ентекләп тикшерергә һәм хәүефһеҙ шарттар тәьмин итергә тейеш, был һәр кемгә яҡшы мәғлүм. Хәрби эксперттар фекеренсә, һаҡ хеҙмәтен ғәҙәттә булдыҡһыҙлыҡта ғәйепләп булмай, ә бына шәхсән Трамптың һаҡсыларына һорауҙар бар. Икенсенән, демократтар яҡлылар һөйләп сығарыуынса, Трампҡа атыу "сәхнәһен ойоштороу", пиар-аҙым хәбәренең дә урынһыҙ икәнлеген иҫбатларға була. Трампты үлемдән бер нисә сантиметр ғына һаҡлап ҡала. Бындай "сәхнә"не ойоштороуы ауыр эш, ти эксперттар.

Нисек кенә булмаһын, был юҫыҡта хәүефһеҙлек агентлығының үҙ бурыстарына яуаплыҙлығы йә булмаһа, һатылғанлыҡ осрағы ярылып ята, ти хәрби эксперт Андрей Клинцевич. Дональд Трампҡа һөжүм ваҡиғаһы ФБР (Федераль тикшеренеү бюроһы) тарафынан тикшерелә башланы. Аҡ йорттоң матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Трампҡа булған һөжүмдән һуң АҠШ президенты Джо Байдендың Техасҡа рәсми сәфәре билдәһеҙ ваҡытҡаса кисектерелде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мөмкинлектәре сикле балаларҙы тәрбиәләү буйынса түләү 10 мең һумға индексацияланасаҡ. Рәсәй Президенты Владимир Путин Мәскәүҙә уҙған "Был беҙҙең ғаиләнеке" конкурсы еңеүселәре менән осрашыуҙа ошо турала белдерҙе. Түләүҙе ата-әсәләргә генә түгел, яҡын туғандарға ла йүнәлтергә кәрәк, тине Президент. Шулай уҡ Путин эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың пенсияһын арттырыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Әлеге закон 2016 йылда ғәмәлдән сығарылғайны.

✓2024 йылда Башҡортостанда махсус йыһазландырылған 171 пляж эшләй, был иһә 2023 йылға ҡарағанда 22-гә күберәк. Был күрһәткес буйынса республика Волга буйы федераль округында алдынғы урынды биләй. Шул уҡ ваҡытта көслө ямғырҙан һуң йылғалар ташҡас, 11 пляж ваҡытлыса ябыҡ. Һүҙ Өфөлә, Салауатта, Ишембай һәм Благовещен районында асылған рәсми ял итеү урындары хаҡында бара.

✓2024-2025 уҡыу йылында республика вуздары барлыҡ йүнәлештәр буйынса 14 меңдән ашыу студентты бюджетҡа ҡабул итәсәк. Былтыр был һан яҡынса 13,5 мең ине. Урта махсус уҡыу йорттарында 22 меңдән ашыу бюджет урыны асылған. Университет-колледждарға ҡабул итеү кампанияһы 25 июлгә һәм 15 августҡа тиклем бара.

✓Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова республика Хөкүмәтенең оперэатив кәңәшмәһендә 8 июлдә Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө уңайынан сараларҙа 10 меңдән ашыу ғаиләнең ҡатнашыуы тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, ошо байрам алдынан Рәсәй Президенты Владимир Путин "Был беҙҙең ғаиләнеке" конкурсы еңеүселәре, Фәтҡуллиндар-Ғәйнетдиновтар ғаиләһе менән осрашты. Башҡортостан вәкилдәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн 5 миллион һум отоуы билдәле.

✓Дәүләт Думаһы депутаттарының тәүге уҡыуҙа ҡабул иткән закон проектына ярашлы, 2024 йылдың 1 сентябренән Рәсәйҙә балаларға алкоголһеҙ тонусты күтәреүсе эсемлектәр, шул иҫәптән энергетиктар һатыу тыйыла. "Табиптар энергетик эсемлектәрҙең зарарлы икәнен раҫлаған. Улар гипертония, шәкәр диабеты, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм башҡа сирҙәргә сәбәпсе булыуы ихтимал. Закон проектының төп маҡсаты - балаларыбыҙҙың һаулығын һаҡлау, йәштәрҙе алама ғәҙәттәрҙән арындырыу", - тине парламент спикеры Вячеслав Володин.

✓ *Йөҙ баллы 153 эште 142 кеше яҙған, шуларҙың бишәүһе - үткән йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары. Ун бер кеше ике предметтан максималь һөҙөмтә күрһәткән, йәғни ике тапҡыр йөҙ баллы һөҙөмтәгә ирешкән.*



ҠЫҪҠАСА

# ҺЫНАТМАЙҘАР!

**Башҡортостандан Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы "Симба" позывнойлы майор, Салауат Юлаев исемендәге икенсе батальон командиры урынбаҫары Донецк Халыҡ Республикаһы биләмәһендә хоҡуҡ тәртибен нығытҡан, дәүләт именлеген тәьмин иткән һәм хәрби бурыстарҙы үтәгәндә башҡа хеҙмәттәре өсөн Суворов миҙалы менән бүләкләнде.** Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Салауат Юлаев исемендәге батальон яугирҙары диверсия-разведка төркөмдәрен эҙләү һәм зарарһыҙландырыу менән шөғөлләнә, улар ҡорал һаҡлағыстарҙы, йәшерен урындарҙы таба. "Симба" 18 махсус операцияға етәкселек иткән һәм үҙе лә ҡатнашҡан, улар барышында енәйәт ҡылыуҙа шик тыуҙырған 17 граждан ҡулға алынған, 12 йәшерен урын табылған, төрлө системалы һәм калибрлы һигеҙ берәмек атыу ҡоралы, 2 меңдән ашыу боеприпас, 40 ҡулдан эшләнгән граната, өс килограмдан ашыу шартлатҡыс матдә тартып алынған. Шул уҡ ваҡытта майор хәрби юғалтыуҙарға юл ҡуймаған, бөтә бурыстар ҙа аныҡ һәм теүәл үтәлгән.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә 1 сентябрҙән Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында һәм Республика инженер лицей-интернатында "Курчатов кластары" асылыуы хаҡында хәбәр итте.** "Был иһә "Курчатов институты" милли тикшеренеү үҙәге менән уртаҡ проект, уны тормошҡа ашырыу тураһында милли тикшеренеү үҙәге президенты Михаил Валентинович Ковальчук менән осрашыуҙа һөйләшеп килешкәйнек. "Курчатов кластары"нда балалар етенсе кластан башлап тәбиғи-ғилми фәндәрҙе тәрәнерәк өйрәнә, тикшеренеү эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә. Рәсәйҙең 12 төбәгендәге 82 мәктәптә ошондай кластар бар. Хәҙер беҙҙә лә асыла", - тип яҙа Хәбиров. Проект сиктәрендә уҡыусыларға заманса ҡорамалдарҙа һәм лабораторияларҙа эшләү мөмкинлеге бирелә, ә методик ярҙамды "Аврора" үҙәге күрһәтә.

✓ **15 июлдән Башҡортостанда Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистика премияһына документтар ҡабул итеү башланды, тип хәбәр итә Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы.** Еңеүселәргә 500-шәр мең һумлыҡ өс премия тапшырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, тәүге тапҡыр бүләкләү суммаһы биш тапҡырға арттырылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Медиайыйын - 2023" форумы йомғаҡтарынан һуң ошондай бурыс йөкмәткәйне. Ҡатнашыу өсөн журналистар һәм журналист коллективтары саҡырыла. 2023 йылдың сентябренән 2024 йылдың авгусына тиклем баҫылған материалдар баһалана. Ғариҙаны 1 сентябргә тиклем Башҡортостандың Журналистар союзына бирергә мөмкин: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 111-се офис. 111 (Матбуғат йортоноң беренсе ҡатында). Телефон: 8 (347) 276-42-66; 8-917-368-32-84. Шулай уҡ Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығында ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 45, 4-се ҡат, 420-се бүлмә. Телефон: (347) 218-07-73, 8-917-409-39-85.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ЯМҒЫР ЭҘЕМТӘЛӘРЕ

**БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың көньяҡ райондарындағы тиҙ арала хәл итергә кәрәкле мәсьәләләргә туҡталды.**

Мәсьәлән, Учалыла һыу үткәргесте яңыртып ҡороу талап ителә. Халыҡ 1961 йылда файҙаланыуға тапшырылған ҡоролма менән файҙалана. Тимер торбаларҙың хеҙмәт итеү ваҡыты тамамланыу сәбәпле, һуңғы ваҡытта авария осраҡтары йышайған. Халыҡты артабан ышаныслы рәүештә һыу менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеү өсөн 6,2 км оҙонлоҡтағы һыу үткәргесте яңыртыу талап ителә. Башҡортостан Башлығы республика Хөкүмәтенә был объектты ремонтлауҙы тиҙ арала ойоштороРға ҡушты. Бынан тыш, Учалыла республика сигендәге юлдарҙы тәртипкә килтерергә кәрәк. Башҡортостан Башлығы төбәктең Транспорт һәм юл хужалығы министрлығына тейешле йөкләмә бирҙе.

Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ Баймаҡ һәм Йылайыр райондарында ташҡынға бәйле хәл тикшерелде. Бында 9-12 июлдәге көслө ямғырҙар йылғаларҙа һыу кимәленең ҡырҡа артыуына килтергән. Ошо бер нисә көнгә айлыҡ яуым-төшөм нормаһының 40 проценты тура килгән. Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев иҫкәртеү сараларының һөҙөмтә биреүе һәм биләмәләрҙе һыу баҫыу хәүефе юҡлығы хаҡында хәбәр итте һәм Хөкүмәттән күпер үткәүелдәрен ремонтлау мәсьәләһендә ярҙам итеүҙе һораны. Йылайыр районы хакимиәте башлығы Борис Мелкоедов Кананикольск ауылында Ҡана йылғаһындағы дамбаның йыуылыуы һәм күпер таяуҙары зыян күреүе тураһында хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы республика Хөкүмәтенә ташҡындан һуң емерелгән юл инфраструктураһын тергеҙеү эшенә булышлыҡ итергә ҡушты.

# ҺӨҘӨМТӘЛЕ ЭШ ӨСӨН

**Екатеринбургта үткән "Иннопром" күргәҙмәһендә 2023 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙә сәнәғәт сәйәсәтен бойомға ашырыу һөҙөмтәлелеге рейтингы йомғаҡтары иғлан ителде. Башҡортостан өсөнсө тапҡыр беренсе урынды алды.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы 2020 йылдан алып Рәсәй Федерацияһы субъекттары башҡарма власть органдарының сәнәғәт өлкәһендәге эшмәкәрлеге һөҙөмтәлелеген баһалай. 2020-2021 йылдар йомғаҡтары буйынса Башҡортостан беренсе урынды алды, 2022 йылда иһә өсөнсөлө ине. Хәҙер республика сәнәғәт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һөҙөмтәлелеге рейтингында йәнә беренсе баҫҡысты. Рейтингта икенсе урынды Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе бүлеште, өсөнсө урында - Краснодар крайы. Тәүге унау иҫәбендә шулай уҡ Санкт-Петербург, Ростов өлкәһе, Татарстан, Силәбе, Түбәнге Новгород, Омск, Свердловск һәм Рязань өлкәләре бар. Рейтинг биш блоктың 42 күрһәткесен баһалау нигеҙендә төҙөлгән. "Һуңғы йылдарҙа республикала алып барылған системалы эш үҙ емештәрен бирә. Санкция баҫымына һәм ҡатмарлы иҡтисади шарттарға ҡарамаҫтан, беҙҙең сәнәғәт тотороҡло үҫешә. Үҙған йыл йомғаҡтары буйынса сәнәғәт етештереүе үҫеше - 6,5 процент, быйыл тәүге биш айҙа 7,4 процент тәшкил иткән. Беҙ Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы, Сәнәғәтте үҫтереү фонды менән әүҙем эшләйбеҙ. Тармаҡ кластерҙарын үҫтерәбеҙ, индустриаль һәм сәнәғәт парктары асабыҙ. Импортты алмаштырыу мәсьәләләре менән шөғөлләнәбеҙ. Инновацион проекттарға ярҙам итәбеҙ. Предприятиелар менән һөҙөмтәле тура бәйләнеш булдырабыҙ. Квалификациялы кадрҙар әҙерләүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин Екатеринбургта "Иннопром" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан стендын ҡараны.

# ИМТИХАНДАРҘА...

**Башҡортостанда 2024 йылда Берҙәм дәүләт имтиханы йомғаҡтары буйынса 153 иң юғары һөҙөмтә теркәлгән. Сағыштырыу өсөн: 2023 йылда 82 эш йөҙ балл менән баһаланған.**

Оператив кәңәшмәлә төбәктең мәғариф һәм фән министры вазифаһын башҡарыусы Альберт Йәримов хәбәр итеүенсә, йөҙ баллы 153 эште 142 кеше яҙған, шуларҙың бишәүһе - үткән йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары. Ун бер кеше ике предметтан максималь һөҙөмтә күрһәткән, йәғни ике тапҡыр йөҙ баллы һөҙөмтәгә ирешкән. 2024 йылда республикала урта дөйөм белем биреү программалары буйынса барлығы 15 меңдән ашыу кеше БДИ тапшырған. Уҡыусылар иң күбе профилле математика һәм йәмғиәтте өйрәнеү, шулай уҡ информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары предметтарын һайлаған.

Альберт Йәримов, төбәк Башлығы указына ярашлы, Берҙәм дәүләт имтиханын йөҙ балға яҙған уҡыусыларҙы әҙерләгән уҡытыусылар 50 мең һум күләмендә премия ала, тип иҫкә төшөрҙө. Бынан тыш, Башҡортостанда 2021 йылдан алып донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенә ҡараған юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән бындай уҡыусылар өсөн республика Башлығының 150 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған премияһы ғәмәлдә. Төбәк етәксеһе шулай уҡ Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы һәм башҡа төбәк-ара конкурстар еңеүселәренә премияларҙы арттырыу мөмкинлеген ҡарарға ҡушты.

# ЙӘШМӘ БҮЛМӘҺЕ БУЛАСАҠ!

**Радий Хәбиров республика рәссамдары менән осрашыуҙа үҙенсәлекле "Йәшмә бүлмәһе" менән сәнғәт музейы-хазинаһын ойоштороу проекты хаҡында белдерҙе. Яңы музей өсөн Совет майҙаны янындағы республика Контроль-иҫәп палатаһының элекке бинаһын тапшырыу ҡарала, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

Музей экспозицияһы дөйөм майҙаны 2 мең квадрат метрлыҡ бер нисә залда урынлаштырыла. "Йәшмә бүлмәһе"ндә мозаика стилендәге художестволы панноларҙа Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте күрһәтелә. "Ватанға хеҙмәт итеү" тигән икенсе зал Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең хәрби юлына бағышлана. Унда төрлө тарихи, шул иҫәптән 1812 йылғы Ватан һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы һәм махсус хәрби операция осорондағы яугирҙарыбыҙ тураһында әҫәрҙәр ҡуйыла. "Башҡортостан хазинаһы" залында уникаль тарихи экспонаттар - "Ирәндек айыуы" тәбиғи алтын киҫәге, сармат алтыны, шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы биләмәһендә ҡаҙыу эштәре барышында табылған Византия алтыны урынлаштырыла. Бында шулай уҡ милли биҙәүестәр, алтын һәм көмөш тәңкәләр коллекцияһын күрергә мөмкин. Дүртенсе залда - картиналар галереяһында Башҡортостандың Милли музейы һәм Михаил Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейы коллекцияларынан башҡорт авторҙарының иң яҡшы һынлы сәнғәт, графика һәм скульптура әҫәрҙәрен ҡуйыу планлаштырыла. Бишенсе һәм алтынсы залдар федераль музейҙарҙың ваҡытлыса экспозициялары, Башҡортостан рәссамдарының күргәҙмәләре, шулай уҡ төрлө лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре һәм презентациялар ойоштороу өсөн тәғәйенләнә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә 2024 йылдың 1 сентябренә тиклем архитектор Рехмуков урамында автомобиль хәрәкәтен асырға йыйыныуҙары хаҡында хәбәр итте. Ҡала башлығы һүҙҙәренсә, әле бында асфальт түшәйҙәр. "500 метр оҙонлоҡтағы яңы урам Глумилино биҫтәһендә йәшәүселәр өсөн юл һәм төҙөлөп яткан Спорт көрәше үҙәгенә инеү урыны булып тора", - тине Р. Мәүлиев. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, объектта эштәр "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Торлаҡ" федераль проекты сиктәрендә алып барыла.

✓Өфөнөң "Транспорт инфраструктураһы идаралығы" предприятиеһы 1 июлдән электр транспортында юл хаҡының үҙгәреүе тураһында хәбәр итте. Пластик карта, берҙәм транспорт картаһы менән, транспорт ҡушымтаһы ярҙамында түләгәндә 31 һум була. Банк картаһы һәм ҡулаҡса менән иһә 35 һум. Мәктәп уҡыусылары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттары өсөн 18 һум була. Багаж өсөн 22 һум түләргә кәрәк.

✓Өфө үҙәгендә яңы йәйәүлеләр урамы барлыҡҡа килә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Ул республика Хөкүмәте вице-премьеры Алан Марзаевҡа һәм Өфө мэры Ратмир Мәүлиевкә Башҡорт дәүләт медицина университеты етәкселеге менән һөйләшеүҙәр үткәрергә ҡушты. "Беҙҙә Театр урамы буйынса программа бар. Унда Башҡорт дәүләт медицина университетының уҡыу корпусы һәм ятаҡтары. Шунда йәйәүлеләр урамын эшләргә кәрәк. Яҡынса проект бар", - тине Радий Хәбиров.

✓"Аэрофлот" авиакомпанияһының Өфө - Сочи маршруты буйынса рейстарҙы аҙнаһына 14-кә тиклем арттырҙы. Улар 158 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A320 самолеттарында башҡарыла. "Урал һауа юлдары" авиакомпанияһы ла 29 июндән ошо йүнәлештәге осош программаһын киңәйтә, Өфөнән Сочиға аҙнаһына өс тапҡыр осорға мөмкин. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, Utair, Nordwind Airlines, Smartavia, Nordstar һәм "Победа" авиакомпаниялары ла Сочиға тура рейстар башҡара. Шулай итеп, йәйгеһен Ҡара диңгеҙ буйына аҙнаһына 40-ҡа яҡын рейс планлаштырыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Халыҡ-ара фотокүргәҙмәгә килеүселәр быйыл үҙенең 450 йыллығын билдәләгән Өфө ҡалаһы, уның тарихи һәм мәҙәни мираҫы, туристик потенциалы һәм ҡунаҡсыллыҡ традициялары менән таныша алды.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ДАН ЙЫРЛАНДЫ...

**"Өфөгә дан йырлап" конкурсы жюриһы 60-тан ашыу конкурс эше араһынан иң яҡшы йырҙы билдәләне. Ул 31 августа Ленин исемендәге майҙанда баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына бағышланған концертта яңғыраясаҡ. Гимндың авторы ла шул көндө билдәле буласаҡ.**

Конкурс яҙ көнө иғлан ителде, бүләк - 100 мең һум. Уның шарттарына ярашлы, гимн үҙенсәлекле милли колоритҡа эйә булырға, Өфө тураһында күңелгә үтеп инерлек һүҙҙәрҙән торорға тейеш. Конкурста профессиональ һәм үҙешмәкәр авторҙар, ижади берекмәләр ҡатнашты. Жюри йырҙарҙы музыкаль әҫәрҙең үҙенсәлеклелеге, башҡарыу сифаты һәм текстың художество ҡиммәте кеүек критерийҙар буйынса баһаланы. "Был конкурс ярыш ҡына түгел, ә Өфө халҡын һәм республикабыҙҙың музыка һөйөүселәрен берләштергән ижад байрамына әүерелде. Конкурсанттар ҡаланың тарихы һәм матурлығы менән илһамланып, тыуған төйәгебеҙгә ҡарата һөйөү һәм ғорурлыҡ хистәре менән һуғарылған әҫәрҙәр ижад итте", - тип билдәләнеләр ойоштороу комитетында.

Ойоштороусылар - Өфө ҡала округы хакимиәте, Башҡортостандың Композиторҙар һәм Яҙыусылар союздары.

# ҠЫТАЙ КҮРГӘҘМӘҺЕНДӘ...

**Баш ҡалабыҙҙың иң гүзәл һәм иҫтәлекле урындарын сағылдырған фотолар "Ике илдең алты ҡалаһы" тип аталған халыҡ-ара күргәҙмә экспозицияһына индерелде. Сараны ойоштороусы - Ҡытай Халыҡ Республикаһы Хэйлунцзян провинцияһы Цицикар ҡалаһының Халыҡ хөкүмәте.**



2022 йылда Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Өфө, Екатеринбург, Ҡаҙан, Хабаровск һәм Ҡытайҙың Цицикар һәм Гуанчжоу ҡалалары араһындағы ниәттәр хаҡында алты яҡлы протоколға имза һалғайны. Фотоэкспозиция ошо документтың ике йыллығына арналған һәм ул июнь айында Хэйлунцзян һәм Гуандун провинцияларында хеҙмәттәшлекте һәм туризмды үҫтереү буйынса уҙғарылған конференцияла күрһәтелде. Цицикар 2015 йылдан бирле Өфө менән туғандаш ҡала, улар араһында эшлекле бәйләнештәр урынлаштырылған, иҡтисад, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәләрендә хеҙмәттәшлек үҫешә бара.

Күргәҙмә өсөн һайлап алынғандар араһында "Ете ҡыҙ" фонтаны, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, Салауат Юлаев һәйкәле, Рәсәй Геройы Миңлегәли Шайморатов һәйкәле, Дуҫлыҡ Монументы, "Ләлә-тюльпан" мәсете, "Торатау" Конгресс-холы, Еңеү паркы, "Арт-Квадрат" йәмәғәт арауығы күренештәре һәм "Өфө - парк-ҡала" концепцияһы сағылдырылған пейзаж фотолары бар.

Шулай итеп, халыҡ-ара фотокүргәҙмәгә килеүселәр быйыл үҙенең 450 йыллығын билдәләгән Өфө ҡалаһы, уның тарихи һәм мәҙәни мираҫы, туристик потенциалы һәм ҡунаҡсыллыҡ традициялары менән таныша алыу йәһәтенән уникаль мөмкинлеккә эйә булды. Быйылғы йылдың октябрь айында Рәсәй менән Ҡытай араһында дипломатик мөнәсәбәттәр урынлаштырылыуҙың 75 йыллығы билдәләнәсәге хаҡында ла уҡыусыларыбыҙҙың иҫенә төшөрәбеҙ.

# ҺИГЕҘ КҮПЕРГӘ... ҺИГЕҘ ТӨҪ!

**Салауат Юлаев проспекты һәм Минһажев урамы киҫелешендә төҙөлгән юл үткәргес алтын-бал төҫөндә яҡтыртыласаҡ. Был хаҡта Өфө мэры Ратмир Мәүлиев белдерҙе.**

Яҡтылыҡ инсталляцияһы әҙер тиерлек инде. Төҙөүселәр ламелдәрҙе ҡуйып бөттө, яҡтыртыу элементтарын монтажлау дауам итә. "Салауат Юлаев проспектының СССР-ҙың 50 йыллығы урамы менән киҫешкән урынындағы күперҙе лә төҫлө яҡтыртыу эштәрен алып барабыҙ. Күперҙе ҡыҙыл төҫтәге нурҙар биҙәйәсәк. Ике юл үткәргес тә июль аҙағына әҙер буласаҡ. Тиҙҙән Киров урамында урынлаштырыуҙы ла эш башлаясаҡбыҙ. Зөбәржәт төҫөн һайланыҡ", - тип яҙа Өфө ҡалаһы башлығы үҙенең telegram-каналында.

Ул бынан бер аҙ элегерәк Өфө урамдарын биҙәү айҡанлы былай тип әйткәйне: "Зәки Вәлиди урамы башындағы күк күпергә һәм Октябрь революцияһы урамындағы йәшел күпергә Галле урамындағы фирүзә төҫлөһө, СССР-ҙың 50 йыллығы урамында - ҡыҙыл, Минһажев урамында - алтын-бал, Әй урамында - шәмәхә, Киров урамында - зөбәржәт һәм Революцион урамда зәғфәрән (ҡыҙғылт һары) төҫлөләре өҫтәләсәк. Һәр бер күпер үҙенсәлекле булып, автомобиль йөрөтөүселәр өсөн үҙенә күрә бер навигатор ролен үтәйәсәк".

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ГӘРӘЕВ МУСА ҒАЙСА УЛЫ

Гәрәев Муса Ғайса улы (1922 -1987) - осоусы-штурмовик, гвардия полковнигы. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы.

Муса Ғайса улы Гәрәев 1922 йылдың 9 июлендә Башҡорт АССР-ының Бәләбәй кантоны (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Илеш районы) Иләкшиҙе ауылында башҡорт крәҫтиәне ғаиләһендә тыуған. Ата-бабалары йылан башҡорттары ырыуынан.

Ете йәше тулғанда уларҙың ғаиләһе күрше Ташшишмә ауылына күсә, Муса 1937 йылда күрше Бишҡурай ете йыллыҡ мәктәбен тамамлай.

1939 -1940 йылдарҙа Өфөлә Тимер юл халыҡ комиссариаты техникумында уҡый. Бер үк ваҡытта Өфө аэроклубында шөғөлләнә. 1940 йылдың 15 декабрендә Ҡыҙыл Армияға алына. 1942 йылда Энгельс хәрби авиация мәктәбен тамамлай.

1942 йылдың сентябренән Бөйөк Ватан һуғышының Сталинград фронтында 26-сы штурмлау авиация дивизияһы составында хеҙмәт итә. 1943 йылдың февралендә 11 хәрби осош яһай, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Сталинградты обороналау өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә.

Артабан Көньяҡ, 4-се Украина һәм 3-сө Белорус фронттарында 944-се штурмлау авиация полкында осоусы-штурмовик, 76-сы гвардия штурмлау авиация полкында звено, эскадрилья командиры булып хеҙмәт итә. 1944 йылдан 3-сө Белорус фронтында 76-сы гвардия штурмлау авиация полкының эскадрилья командиры, гвардия капитаны, 1945 йылдан - гвардия майоры.

Сталинград, Донбасс, Ҡырым, Белоруссия, Польша, Германия күгендә һуғыштарҙа ҡатнаша. 1945 йылдың мартына эскадрилья командиры, гвардия майоры Муса Гәрәев "Ил-2" самолётында 207 хәрби осош яһай, күрһәткән батырлыҡтары һәм ҡаһарманлыҡтары өсөн СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 23 февралендәге һәм 1945 йылдың 19 апрелендәге Указдарына ярашлы, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Мәскәүҙә 1945 йылдың 24 июнендә үткәрелгән Еңеү Парадында ҡатнаша.

1951 йылда Мәскәүҙә М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны, 1959 йылда СССР Ҡоралны Көстәре Генераль штабының Хәрби академияһын тамамлай. 1959-1964 йылдарҙа 2-се махсус тәғәйенләнештәге авиация дивизияһы командиры урынбаҫары булып хеҙмәт итә. 1964 йылда һаулығы насарайыу сәбәпле отставкаға сыға. 1965-1977 йылдарҙа ДОСААФ-тың Башҡортостан өлкә комитеты рәйесе вазифаһын үтәй. Башҡортостанда спорттың хәрби-техник төрҙәрен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә.

СССР Юғары Советының 2-4-се саҡырылыш, Башҡорт АССР-ы Юғары Советының 7-9-сы саҡырылыш депутаты. 1987 йылдың 17 сентябрендә Өфөлә вафат була. Баш ҡаланың Еңеү паркында ерләнә.

Наградалары:

Ике "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин, өс Ҡыҙыл Байраҡ, 3-сө дәрәжә Богдан Хмельницкий, ике 1-се дәрәжә Ватан һуғышы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, өс Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, башҡа боевой миҙалдар менән бүләкләнгән.

М.Ғ. Гәрәев - Өфө ҡалаһының һәм Илеш районының почётлы граждандары.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Алма

❖ Йөҡонһоҙлоҡтан 3 балғалаҡ алма һеркәһе, ярты стакан балдан торған ҡатышманың 2 балғалағын төнгөләккә эсеп ятырға.

❖ Сәс ҡойолғанда 1 стакан ҡайнатылған һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһе ҡойорға һәм 6 көн дауамында көн һайын эсергә.

❖ Гипертония, подагра, һимеҙлек менән шәкәр диабеты, бәүелдә таш булғанда алманы турап, өҫтөнә ауыр нәмә баҫырып һалырға, йәки һут һыҡҡыс ҡулланырға. 3 стакан һутҡа 1 стакан һыу ҡушып, килеп сыҡҡан дауаны 4-кә бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Киҙеү йөктөргәндә алманың ҡабығын әрсеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙын ябып төнәтеп, йылы көйө эсергә.

❖ Ашҡаҙан ауырыуҙарынан алманы әрсеп, ҡырғыстан үткәрергә һәм көн һайын 150-шәр грамм ашарға. Уны ашарҙан алда һәм ашағандан һуң 4-5 сәғәт тирәһе бер нәмә лә ашапэсергә ярамай. Мәҫәлән, иртәнге сәғәт 7-лә, шунан иртәнге 11-12 тирәһендә алма "бутҡа"һын ашарға. 1 ай шул рәүешле көн һайын туҡланғас, икенсе айҙа аҙнаһына 3 тапҡыр, өсөнсө айҙа аҙнаһына 1 тапҡыр ашарға.

❖ Ҡалҡан биҙе ауырыуҙарынан көн һайын 5-6 бөртөк алма орлоғон ашарға. Организм бер тәүлеккә етәрлек йод менән тулыландырыласаҡ.

❖ Эс ҡатҡанда 2 алманы телгеләп, 1 стакан ҡайнар һөт һәм ярты стакан эҫе һыу ҡойорға, 5 минут утта ҡайнатырға. Дауаны ас ҡарынға эсергә, алмаһын да ашап ҡуйырға. Был айырыуса оло йәштәгеләрҙең эсен йомшартырға яҡшы. Мейестә бешерелгән алма ашау ҙа файҙалы.

❖ Йүтәлдән 1/2 стакан алма һеркәһенә 2 ҡалаҡ глицерин һәм 3 ҡалаҡ бал ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда һәм 1 тапҡыр төнгөләккә 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Шулай уҡ йүтәлдән 1 стакан балға 6 ҡалаҡ алма һеркәһен ҡушып, иртәнсәк һәм кис 1-әр ҡалаҡ ашарға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Торомтай
**(Обыкновенная пустельга)**



Беҙҙең яҡта осраған йыртҡыс ҡоштарҙың иң киң таралғаны. Сағыштырмаса киң ҡанатлы, осо түңәрәкләнеп торған оҙон ҡойроҡло вағыраҡ ҡош. Ата торомтайҙың башы, ҡойроғо, ҡойроғоноң өҫкө яғы буҙ төҫтә, арҡаһы һәм ҡанаттары алһыу-ерән, инә һәм йәш ҡоштарҙың өҫкө яғы тут төҫөндәге ерән. Ҡойроғоноң сите буйлап тар ғына аҡ һәм киң ҡара буй үткән. "Мыйығы", тырнаҡтары ҡара. Һауала саҡта ҡойроғон аҫҡа төшөрөп, бер урында ҡатып ҡала торған сифаты бар.

Ҡарғаларҙан ҡалған ояларға, ҡаялағы ярыҡтарға оялай. Мүктәргелләр менән бер колония яһап йәшәй. 1964 йылда Учалыла бер һаҙлыҡтың ситендә үҫкән талда ике торомтай ояһына тап булдыҡ, уларҙа 5-әр йомортҡа бар ине. Студенттар менән йыл да "Нуғай" уҡыу базаһында практика үткән һайын был ҡоштарҙы күҙәтә инек.

Кимереүселәр, бөжәктәр, һирәгерәк ваҡ ҡоштар менән туҡлана.

## Ялан торомтайы
**(Степная пустельга)**



Ваҡ бөркөттәр рәтенә инә, кәүҙәһе күгәрсен ҙурлыҡ ҡына. Йыраҡтан уны ябай торомтайҙан айырып та булмай, уларҙың төҫө лә, тауышы ла оҡшаш. Әммә ялан торомтайы еңелерәк оса. Төҫө лә асығыраҡ, сағыуыраҡ, тырнаҡтары ла асыҡ төҫтә. Оло ата ҡоштоң башы, аяҡтары күкһел, арҡаһы кирбес төҫөндә, кәүҙәһенең аҫҡы өлөшө ерән-көрән, ҡарараҡ таптар менән ҡапланған.

Ялан торомтайы юғалыу хәлендәге ҡош, ул Ҡыҙыл китаптарҙан тыш, был төрҙө нығлап өйрәнеү һәм һаҡлау маҡсатынан барлыҡҡа килгән "Халыҡ-ара план"ға индерелгән.

Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә оя ҡора, урманлы, һыулы-һаҙлыҡлы урындарҙы, баҫыуҙар булған ерҙәрҙе яратмай. Асыҡ ерҙә оя ҡора, 10-пар бергәләп колония булып йәшәүҙәре лә билдәле. Төнгөләккә улар бер урынға йыйылып төнләй. Туҡланыу рационы башлыса бөжәктәрҙән тора, һирәгерәк кеҫәртке тота, ә бына ҡоштарға, сысҡандарға һунар итмәй тиерлек.

2-8 йомортҡа һала, ике ҡош та сиратлап 1 ай буйына баҫа. Июль-август урталарында йәш ҡоштар ояны ташлап оса. Көньяҡ Урал ялан торомтайы иң күп йәшәгән төбәк булараҡ билдәлә, ғалимдар яҡынса 50 пар ялан торомтайы иҫәпләгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Тажикистан башлығы Эмомали Рахмон күптән түгел ҡул ҡуйған закондарҙың береһендә шул ил ҡатын-ҡыҙҙарына хижәп кейеүҙе тыйып, милли кейемдә йөрөүҙе генә рөхсәт иткән, имеш. Ошо турала бөтә йәмғиәт интернет селтәре аша саң ҡаға. Берәүҙәр уны хуплай, "Әллә ҡасан шулай кәрәк ине, юғиһә, йөрөйҙәр шунда, сепрәккә төрөнөп..." тигән һымағыраҡ хәбәрҙәр йөрөтә. "Мосолман иле булып һаналған илдә шул юғарылыҡҡа өлгәшелгән, ә ниңә беҙҙең Рәсәйҙә һаман шундай закон индермәйҙәр?" тип тә ебәрә икенселәр. "Мин үҙем мосолман динендәмен, әммә тик аят мәжлестәренә генә яулыҡ ябынып йөрөйөм, миңә ана шул еткән", тиеүселәр ҙә юҡ түгел. "Ни өсөн бот төбөнә тиклем ҡыҫҡартылған, түштәре ярым асыҡ күлдәктәрҙе тыйыу урынына һаман шул хижәпкә бәйләнәләр?" тип, ризаһыҙлыҡ белдереүселәр ҙә бар...**

# БАШҠОРТТОҢ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

## динебеҙ талаптарына ла тап килә

Халҡына һәм диненә битараф булмаған һәр кем ошо хаҡта уйланмай ҡалмайҙыр. Әлеге "хижәп" ниндәй мәғәнәгә эйә булыуын башта асыҡлап китеү кәрәк тип һанайым. "Хәжәбә" тигән һүҙ ғәрәптән "ҡаплау", "йәшереү" тигән мәғәнәгә эйә булып килә. Ислам дине ҡанунына ярашлы, ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ирҙәргә тәндәренең айырым урындарын ҡаплап йөрөргә ҡушылған. Был талапты боронғо ғәрәптәр йә беҙҙең диндар ата-олаталарыбыҙ ҙа уйлап сығармаған. Изге Ҡөрьәндә ана шул хаҡта аят бар.

Хижәп тигәс тә, күптәр шунда уҡ ғәрәп ҡатын-ҡыҙҙары кейеп йөрөгән кейемде күҙ алдына килтерә. Бит һәм ҡул суҡтарын ғына күрһәтеп, ҡалған урындарҙы йәшереүҙе маҡсат итеп тегелгән яулыҡ-күлдәктәрҙе фәҡәт "ғәрәпсә генә" булырға тейеш икән тип уйларға ярамай. Ябай ғына миҫал итеп, үҙебеҙҙең боронғо өләсәйҙәребеҙҙе күҙ алдына килтерәйек. Электән һаҡланып килгән ҡайһы бер фотоһүрәттәрҙә лә күрәбеҙ: уларҙың кейеме ана шул хижәп талабына тап килә лә инде. Бер аҙ һарғая биргән фотола (уға быуаттан ашыу ваҡыт!) ғаилә башлығы - ыҫаныслы ҡарашлы ныҡлы ир янында түшен, буйһындарының формаһын, аяҡтарын, беләктәрен күрһәтмәҫлек киң һәм оҙон итеп тегелгән күлдәк, баш-сәсен, муйынын ҡаплап торған яулыҡ ябынған хәләл ефете, шундай уҡ кейемдәге ҡыҙҙары... Береһененң дә бите ҡапланмаған. Бөгөнгө көндә күп кенә ағинәйҙәребеҙ ҡабаттан аяҡҡа баҫтырырға тырышҡан ана шул милли ҡатын-ҡыҙ кейеме, ябай итеп кенә әйткәндә, буйтым хижәп тә баһа! (Берәүҙәргә, бәлки, уның ғәрәпсә булған исеме оҡшамайҙыр?) Эш уға ҡалһа, иман, бәхет, ғүмер, мөхәббәт, ризыҡ, һауа, бәлә, ҡаза, ҡәбер, зыярат һымаҡ, телебеҙҙең яртыһын тиерлек тәшкил иткән бихисап ғәрәп һүҙҙәре менән дә ризалашмайыҡ әйҙә!) Бәгзеләр ҡурҡҡан бындай кейем ни бары үҙенең яҡындарынан (ире, балалары, ата-әсәһе) башҡа кешеләргә тән гүзәллектәрен күрһәтмәүҙе генә күҙ уңында тота. Унан һуң, хижәп кейеү итәгәтлекте лә күрһәтә бит. Башҡалар алдында әллә кем булып йөрөүҙе түгел. Әлеге тажик ҡатын-ҡыҙҙары өсөн, кемдер әйтмешләй, "ғәрәп хижәбен" тыйыуын тыйғандар ҙа икән ти, тик уларҙың үҙҙәренең милли кейеме, әйтәйек, беҙҙең өләсәйҙәребеҙҙеке һымаҡ, тейешле ерҙәрен ҡаплап торорлоҡ булһа ярай ҙа һуң...



Ҡатын-ҡыҙ тәнендәге ҡапмаҡаршы енес вәкиленең күҙен ҡыҙҙырырҙай урындар - хатта беләге, муйыны, сәсе лә (бил һыны, боттары хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ) ғәүрәткә һанала. Аллаһ Тәғәлә бына шулай матур итеп яралтҡан "көсһөҙ затты". Әлбиттә, башҡаларҙан ныҡ айырылып тороу маҡсатында сөм-ҡара төҫтәге кейем кейеү динебеҙ сөннәтендә ҡаралмаған. Әммә, бәгзе гүзәлдәребеҙ шундай кейем кейергә йөрьәт иткән икән, минеңсә, уларға ла ҡырын ҡарау ярамай.

Нәфис заттарыбыҙҙың яулыҡта, оҙон күлдәктә йөрөүен яратмағандар, бәлки, динебеҙҙә күп кенә булған тағы ниндәйҙер сикләүгә ҡаршы булыр икән? Әйтәйек, хәрәм һаналған отошло уйындар, риба (ростовщичество), хәмер эсеү һымаҡ тыйыуҙарға... "Хәҙер боронғо бәйғәмбәрҙәр заманы үткән, мәҙәни рәүештә генә "күңел өсөн" илле грамдан бер нәмә лә булмай ул, башҡа халыҡтарҙан беҙ чем хуже?.. Замандан артта ҡалыу ярамай!.." - тип, Ҡөрьәндәге ҡәтғи тыйыуҙы инҡар итеүселәр табылһа, нишләрбеҙ?

Ә инде "көслө зат"ҡа килһәк, кейем буйынса талап башҡараҡ. Ир-аттың тубыҡтан аҫта һәм кендектән өҫтә булған ере - ғәүрәткә һаналмай. Ябай ғына итеп әйткәндә, урам буйлап ир заты тубығына тиклем шорты, өҫ яғына майка-фәлән генә кейеп йөрөһә лә, уға гонаһ булмай. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ниндәй генә әҫе көн булмаһын, ир кеше барыбер салбар, иркен күлдәк, хатта башына ла ниҙер кейеп йөрөргә тырыша. Ә бәгзе гүзәлдәребеҙ - тап киреһенсә! Динебеҙҙең етди талаптарын белмәүҙән йә иһә уны танырға теләмәүҙән генә түгел, үҙебеҙҙең милли әҙәп-ҡағиҙә талаптарын да һанға һуҡмауҙан бит инде был.

Бынан тыш, Аллаһ илсеһе ирәтҡа мыйыҡтарҙы ҡыҫҡартырға, әммә һаҡал үҫтерергә ҡушҡан. Был - Бәйғәмбәр с.г.с. сөннәте. Әлеге боронғо фотоһүрәттәргә иғтибар итһәк, Ислам динен тотҡан беҙҙең ата-бабаларыбыҙ барыһы ла һаҡаллы булған бит. Бөгөнгө йәмғиәттә, әлбиттә, һаҡалдан шикләнеү тигән нәмә лә бар. Бәлки, бәгзеләрҙе атабабаларыбыҙҙыҡы һымаҡ бәләкәй түгел, ә "кәрәк һымаҡ" оло һаҡал йөрөтөүе шикkә һалалыр? Нисек кенә булмаһын, диндәгеләрҙең кейем буйынса ла, хижәп-яулыҡ, һаҡал буйынса ла сама сиктәренән сыҡмауы, үҙебеҙҙең әҙәп-йолаларҙы күҙәтеүе фарыҙ, әлбиттә. Шуның өсөн таяҡты артыҡ бөкмәйек, туғандар, тип әйтке килә.

Ҡайһы бер әҙәмдәр мосолманса кейенгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ҙурыраҡ һаҡаллы йәш егеттәребеҙҙе күрһә, шунда уҡ "террорсы"ға ла оҡшата башлай. Был дини тарафтан тома наҙанлыҡтан килә. Терроризм афәтенә ҡаршы көрәшәм тип, бәгзе илдәрҙә мосолмандарҙың тышҡы ҡиәфәтенә артыҡ ныҡ бәйләнеүҙәр ҙә ана шул сәбәпле килеп сыҡҡан булһа кәрәк. Ислам дине исеменән сығыш яһаған һәр төрлө шартлатыусылар, һис ғәйепһеҙ кешеләрҙең ғүмерен ҡыйыусылар менән беҙҙең хаҡ динебеҙҙең һис уртаҡлығы юҡ. Ислам - тыныслыҡ һәм мәрхәмәтлек дине! Ана шундай теләнә ниндәй еңәйәтселәрҙе беҙҙең дин менән йәнәш ҡуйып маташыу - ололарҙан оло хата.

Әйткәндәй, Дағстан республикаһы етәксеһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың никап (күҙ тишеге генә ҡалдырып, йөҙҙә бөтөнләйгә ҡаплаусы баш кейеме) кейеүенә ҡаршы булыуын белдергән. Был осраҡта төбәктә динден көслө булыуына ҡарамаҫтан, Кавказ халыҡтарына ул кейемдең хас булмауы, яулыҡ аҫтында ирҙәр йәшенеүе, тыйылған әйберҙәрҙе йөрөтөү ҡурҡынысы булыуы күҙ уңында тотола. Никап кейеүҙең динебеҙҙә ҡәтғи талап ителмәүе тураһында мөфтөйҙәрҙән әйткәнен уҡығаным бар. Тик бына шул мосолман кейемен тыйыу һымаҡ хәлдәр шул уҡ мосолман илдәре халҡын ризаһыҙлыҡҡа килтермәгәйе. Тыныс йәшәйек, ҡәҙерле милләттәштәр!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)

### Н.Н. Бахметев
**(1798-1803)**



Губернатор Николай Николаевич Бахметев Павел I батшалыҡ иткән ваҡытта ошо вазифаға йәш кенә көйөнсә ҡуйылды, ул казактарҙы ҡаты ҡыҫымға алыусы һәм ҡыуыусы булараҡ билдәлелек алған губернатор.

Ул саҡта Ырымбур казактар йәшәгән ярлы өйҙәрҙән тора ине. Бахметев уларҙы ҡаланан көсләп ҡыуып сығарырға теләмәне һәм быны законлы тип тапманы. Халыҡ һөйләүенә ҡарағанда, ул айырым кешеләр аша насар өйлө кварталдарҙы яндырырға мәжбүр итә һәм шул алым менән ярлы казактарҙы ҡаланан һалдаттар һәм өйһөҙ казактар йәшәгән форштадтҡа күсертә, ул Георгий сиркәүе янындағы түбәнге урамдарҙа, артиллерия паркы эргәһендә урынлашҡан була. Ҡалала тик казак чиновниктары ғына тороп ҡала; улар үҙҙәре генә ҡалала йәшәү хоҡуғына эйә була, һәм был ҡарар хәрби губернатор Эссен идара иткән саҡта ла бер нисә тапҡыр раҫлана, губернатор канцелярияһы архивында ошо хаҡта хат алышыу булғанын үҙем күрҙем...

Бер пехота полкы һалдаттары, үҙҙәренең шефы, генерал Бахметевтың йомшаҡлыҡ күрһәтеүенә арҡаланып, ҡала кешеләрен йыш рәнйетә һәм хатта талай башлай; Бахметевты шәхсән хәтерләгән В.М. Смольников һөйләүенсә, уларҙы бер кем дә судҡа тарттырмай; Смольников 1853 йылда вафат булды.

### Кенәз Г.С. Волконский
**(1803-1817)**

1803 йылда Бахметев урынына кенәз Григорий Семенович Волконский ҡуйыла. Замандаштарының уртаҡ фекеренә ярашлы, ул ҡарт, әммә шул осорҙа талап ителгән боевой хеҙмәткә яраҡлы кеше була; уның сәйер ҡылыҡтары һәм ғәҙәттәре ул заманда дөйөм ҡабул ителгән йәшәү шарттарынан ҡырҡа айырылып тора: төнгә ҡалпаҡта, йоҡо курткаһында һәм ябай панталондарҙа ҡала буйлап йөрөй; йәш һәм матур ҡатын-ҡыҙ осраһа, уны үбеп ала, артынан ҡалмай йөрөгән лакейынан йә иһә камердинерынан аҡса алып, ошо ҡатынға бирә; ҡайһы саҡта ҡаланан ситкә алыҫҡа сығып китеп арығас, йөк ташыусы крәҫтиәндәрҙең арбаһына ултырып ҡайта.



Бер саҡ шундай хәл була. Йәйәү йөрөп ныҡ арыған кенәз утын тейәлгән санаға менеп ултырған. Йөктөң хужаһы уны, атының арыҡ булыуына һәм йөктө саҡ тартып килтереүенә һылтанып, ҡыуа башлаған. "Мин үҙем йәйәүләп киләм, ә һин йөккә менеп ултырҙың. Төш бынан! Әтеү күрһәтермен", - ти ҙә, сыбыртҡыһын күрһәтә. Кенәз, янауға ҡарамаҫтан, сананан төшмәй. Ҡалаға Һаҡмар ҡапҡаһынан ингән саҡта гаубтвахтала торған хәрби ҡараусыл, йүгереп сығып, уға честь бирә, барабансы барабанын ҡаға, офицер фронт алдында командалар бирә икән. Мужик ҡурҡып киткән һәм былай тип әйткән: "Барин, улар һинә честь бирәләрме? Әйт әле, барин, һин кем булаһың? Аллаһ хаҡына мине тупаҫлығым өсөн ғәфү ит инде". Кенәз уға ҡайһы урамға барырға кәрәклеге хаҡында әйткәс, мужик уйлай икән: "Моғайын, мине полицияға алып барыр, унда минең даным сыҡҡансы кәрәгемде бирерҙәр, был хаҡта ейәндәремә лә әйтергә онотмаҫтар!" Мужик шулай бара, кенәз һаман йөктә ултыра. Бер өйгә килеп етәләр. Унда ихатала хужаны баш эйеп ҡаршы алалар, ә кенәз мужиктың утынын алырға һәм йомарт итеп аҡса түләргә бойора.

Атайым үҙе менән булған бер хәл тураһында һөйләгәйне. Ул иптәштәре менән мәктәптән төшкө ашҡа ҡайтып килгәндә уларға Орск ҡапҡаһы янында кенәз осраған; ул атайымды үҙе янына саҡырып алып, итеген систерергә, шунан яңынан кейҙерергә ҡушҡан. Шунан кенәз "Рәхмәт!" тигән дә ары киткән. Был хәл хәрби ҡараусыл алдында булғас, бер һалдат атайымдан һорай икән: "Кенәз һинә ни бирҙе?" - тип. Атайым баҡыр бер һум алыуы хаҡында әйткән. Ә теге һалдат атайыма: "Ниндәй бәхет! Бына беҙ бында торабыҙ, ун тин бирһәләр ҙә бәрәкәтле булыр ине", - тип әйткән.

Кенәз Волконскийҙың ҡайһы берҙә, бигерәк тә изге Пасха, Троица, Вознесение кеүек ҙур байрам көндәрендә, үтеп барышлай, халыҡҡа баҡыр аҡсалар ташлай торған ғәҙәте булған.

Һөйләүҙәренә ҡарағанда, ул Александр I суҡындырып ҡойондорған мәлдә уның восприемнигы (кәфиле, яуаплылыҡ алыусыһы. - **Тәржемәсе иҫкәрмәһе**) булғанлыҡтан, батшаның айырым илтифатына өлгәшкән. Был дөрөҫмө, юҡмы, белмәйем.

Кенәз Волконский айырым осраҡтарҙа барса халыҡ өсөн күңел асыу байрамдарын ойошторорға яратҡан. Бындай кисәләр ҡыҙыҡлы программалары менән айырылып торған: фейерверктар ебәреү, ракеталар осороу, каскад рәүешле төрлө төҫтәге уттар ҡабыҙыу ошо байрамдарҙы биҙәгән.

Кенәз Волконский йәшерәк сағында үҙен яҡшы администратор итеп танытҡан, 1805 йылда Уральск казактары болаһын баҫтыра алған. Ул казактарҙы тынысландырыу өсөн башҡорттарҙы ебәргән, һуңынан кенәз Волконскийҙың юллауы буйынса император Александр I башҡорттарға грамотаһы менән байраҡ тапшырырға бойорған. Башҡорт ғәскәре бөтөрөлгәс, 1863 йылда ошо байраҡ һәм грамота Ырымбур округының округ штабына ебәрелгән.

Ул идара иткән йылдарҙа башҡорттар өсөн яҡшы әҙәмтәләре булған яңы система индерелә. Был халыҡ менән XVIII быуат аҙағына тиклем һайлап ҡуйылған старшиналар идара итә, ә улар үҙҙәре исправниктар йөҙөндә земство полицияһына һәм дворяндар заседателдәренә буйһона, ә һуңғылары, билдәле булыуынса, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы һәм ришүәт талап итеүсе кешеләр.

Рәсәй подданствоһына күскәс тә, башҡорттар менән идара итеү тәртибе үҙгәртелмәй ҡала. Башҡорттарҙың хандары булған хәлдә лә, ырыу аристократияһы барлыҡҡа килмәй: бөтәһе лә тигеҙ хоҡуҡлы, өҫтәрен биләү ырыуҙары буйынса барыһы өсөн уртаҡ була. Рустарға буйһонғас, башҡорт халҡы батша Иоанн IV Васильевичҡа үҙҙәренең Мөхәммәт динен һаҡлап ҡалыу хаҡында үтенес белдерә һәм тәүге осорҙа үҙҙәренең хәле менән ҡәнәғәт ҡала. Улар араһына баярҙарға һәм ҡара халыҡҡа, йә иһә крәҫтиәндәргә бүленгән рус кешеләре килә башлағас, башҡорттар үҙҙәренең иң күренекле кешеләре менән бергә һуңғы класҡа тиңләнеүен күрә.

Хөкүмәт башҡорттарҙан бик аҙҙарына ғына хеҙмәттәре өсөн тархан званиеһы бирә, улар шәхсән яһаҡ түләүҙән азат ителә, әммә, дөйөм алғанда, уларҙың күренекле кешеләре лә, крәҫтиән разрядына тиңләнеп, рус чиновниктарына буйһондорола. Һис шикһеҙ, ошолай итеп кәмһетелеү, башҡаларымен бер рәттән, уларҙың йыш ҡубып торған болаларына сәбәпсе була.

1796 йылда элекке хәрби губернатор барон Игельстром император ғали йәнәптәренең ризалығы менән элекке Ырымбур, шулай уҡ Пермь, Вятка һәм Һарытау (Новоузен һәм Николаев өйәҙҙәре) губерналары сиктәрендә барса Башҡортостанды 12 кантонға йәки округҡа бүлә, һәм һәр кантонға кантон начальнигы тәғәйенләнә, улар чиновник вазифаһын башҡарырға тейеш була.

Был яңылыҡ халыҡ теләгенә ярашлы була: уның иң күркәм заттары, рустар кеүек үк, чиновник була алыуҙарын күрә, һәм, унан башҡа, исправниктарға буйһондоролған булыуҙарына ҡарамаҫтан, кантондыҡылар Ырымбур хәрби губернаторы менән туранан-тура мөнәсәбәткә инә алыу хоҡуғына эйә була, улар губерна етәкселегенә барған саҡта губернаторҙан үҙ исемдәренә яҙылған күрһәтмә алған, һәм ошо юғары зат йөҙөндә үҙҙәрен земствоның вазифалы кешеләре ҡыҫымынан яҡлаусыны күрә.

Аҙмы-күпме йөғөнтоһо булған һәр башҡорт чин алырға теләй ине, ул хеҙмәттән сығыуҙан һуң уның хоҡуҡтарын һаҡлау мөмкинлеген биргәне һәм тән яҙаларынан ҡотҡарғаны менән ҡиммәт була. Хеҙмәттә булған саҡтарында кантон начальниктарына 14-се кластан 12-се класҡа тиклем чин алыу, ә хәрби уныштары өсөн прапорщиктан майор дәрәжәһенә тиклем күтәрелеү мөмкинлеге бирелә. Шул уҡ чиндар хеҙмәттәге файҙалы ғәмәлдәре өсөн башҡа кешеләргә лә бирелде, әммә барыһын да ошолай йомарт бүләкләргә ярамай ине.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Юғары Баш командование Ставкаһы, килеп тыуған хәлдәрҙе иҫәпкә алып, 2-се Белорус фронтына дошмандың Көнсығыш Померания төркөмөн юҡ итергә бойора. Беҙҙең частарға Балтик диңгеҙенең яр буйын Висла йылғаһы тамағынан Одер йылғаһы тамағына тиклем араҙыҡта немец ғәскәрҙәренән таҙартыу һәм Данциг (Гданьск), Гдыня порттарын алыу бурысы йөкмәтелә. 10 февралдә 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре һөжүмгә күсә, әммә алға китеш бик әкрен бара: дивизияларҙың составында көстәрҙең аҙ булыуы, артиллерия һәм танкылар етешмәүе ҡамасаулай. Ә дошман бында алдан әҙерләнгән, яҡшы нығытылған оборона рубежын - бер нисә һыҙыҡтан торған Померания валын биләй. Ошоларҙы иҫәпкә алып, Ставка ҡәтғи саралар күрә. Ул операцияға тағы ла 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәрен, уның танк армияларын һәм Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы частарын йәлеп итә. Шулай уҡ Балтика флоты көстәренең бер өлөшө ярҙамға килә.

1-се Белорус фронтының Хәрби Советы тәҡдименә ярашлы, Ставка уның ғәскәрҙәренең Көнсығыш Померания операцияһында ҡатнашыу планын раҫлай. Дошман ғәскәрҙәрен төньяҡҡа табан ҡыҫырыҡлап барып, Драмбург, Голлнов, Штеттин рубежына сығыу, немец частары коммуникацияларын көнбайыш юҫыҡтан өҙөү һәм 2-се Белорус фронтының һул флангыһына тиҙ арала Штеттин районына сығыу мөмкинлеген булдырыу күҙаллана. 61-се, 2-се гвардия танк армияларына, 7-се гвардия атлы корпусына һәм 9-сы танк корпусына, һөжүм итеү операцияһының төп йүнәлешендә төньяҡ-көнбайышҡа табан хәрәкәт итеп, Массов, Голлнов, Штеттин рубежына сығыу бурысы ҡуйыла.

Поляк ғәскәренең 1-се армияһы һәм 3-сө удар армия, 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре менән бергә хәрәкәт итеп, дошманды төньяҡ йүнәлештә сигенергә мәжбүр итер өсөн ярҙамсы һөжүм операцияһы үҙғара. Операция барышында планға бер ни тиклем үҙгәрештәр индерелә: 61-се армия, 7-се кавкорпусы һәм

2-се гвардия танк армияһы алдында төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш йүнәлешендә Каммин и Голлновка табан һөжүм итеү бурысы ҡуйыла. 47-се армия 1-се механизациялаған корпус менән Альтдамға һөжүм итә.

Яңы хәрби бойороҡ алғас, 7-се гвардия кавкорпусы тәүҙә 300 саҡрымлыҡ маршҡа сыға һәм Реетц ҡалаһынан төньяҡ-көнбайыштараҡ бер урманда туплана. Частар тик төндәрен генә хәрәкәт итә, көндөҙ урманда йә иһә тораҡ пункттарҙа, ҙур юлдарҙан ситтә урынлаша. Артиллерия, машиналар, йөк арбалары, аттар маскировкалана, радиобәйләнеш тотоу тыйыла. Бойороҡтар һәм ҡарарҙар штаб һәм бәйләнеш офицерҙары тарафынан телдән генә тапшырыла. Аҙыҡ-түлек һәм фураж менән тәъмин итеү ҙә алдан, тик төндәрен генә башҡарыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың әйткәненә өҫтәп, беҙ боронғолоҡто белеү генә түгел, уны һаҡлау һәм яҡлау мохтажлығы булыуын онотмаһаҡ ине. Был яҡтан эшмәкәрлегебеҙ ҡәнәғәтләнерлек түгел.*

# БАШҠОРТТАР

## йәки Сал тарихтан



***Урал батыр тере һыу эҙләп сыҡҡан сәйәхәте барышында ниндәйҙер ҡалаларға юлыға, унда хан, батша булып ултырған, халыҡты интектергән яуыз заттар менән көрәшкә сыға, уларҙы еңеп, батыр исемен ала. Тимәк, боронғо эпоста ҡалалар тураһында бәйән ителгәс, башҡорттарҙың ата-бабалары ла ҡалалар менән таныш булған һәм уларҙың билдәле бер өлөшө ҡалаларға йәшәгән, тип фараз итергә була.***

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Башҡортостан Республикаһы Ә. З. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм һирәк баҫмалар бүлеге мөдире, иҫке төрки теле буйынса маһир белгес, филология фәндәре кандидаты СИБӘҒӘТОВ Флүр Шәрифулла улы. Әңгәмәбеҙҙә һүҙ башҡорт халҡының тарихи үткәне, боронғо ҡалалары, Өфө ҡәлғә-ҡалаһының тарихы һәм ҡалалашыу проблемалары хаҡында барҙы.**

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына арналған "Өфө тарихи киңлектә һәм ваҡыт арауығында" тигән Бөтә Рәсәй фәнни форумы уҙғарылды, унда тарихсылар һәм башҡа белгестәр ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Һеҙ, Флүр Шәрифулла улы, ошо түңәрәк өҫтәлдең модераторы булараҡ, ғалимдарҙың сығыштары хаҡында ҡыҫҡаса әйтеп китһәгеҙ ине.**

- Форумдың фәнни өлөшөн билдәле ғалим-археолог, тарих фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының урта быуат археология бүлеге ғилми хеҙмәткәре Игорь Кызласовтың доклады асты. Игорь Леонидович - Евразия континенты ҡалаларының барлыҡҡа килеү һәм үҫешеү процестарының берҙәм һыҙатҡа буйһоноу концепцияһы авторы. Үҙенең сығышында ғалим авторлыҡ тикшереү методикаһы һәм шәхси практик эшмәкәрлек тәжрибәһе нигеҙендә боронғо Өфө ҡаласығында урынлашҡан тәрән традицион күренештәрҙе асып бирҙе. "Өфө ҡаласығының мәҙәни ҡатламдары күрһәтеүенсә, ул беҙҙең эраның V быуатынан кәм тигәндә XV быуатына тиклем йәшәп килгән. Унда ҡала төҙөү, төҙөкләндереү, фортификация мәҙәниәттәренең үҫешкән булыуы күренә. Донъя тарихында былдай күп ҡатламлы, ҡатмарлы ҡаланы өйрәнеү тәжрибәһе әлегә юҡ", - тине Игорь Леонидович.

Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй халыҡтары тарихы һәм этник-ара мөнәсәбәттәр үҙәгенең баш ғилми хеҙмәткәре, ғилми секретары Жамал Рахаев Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Вадим Винцерович Трепавловтың ғилми эшмәкәрлеге хаҡында һөйләне.

Өфө тарихы буйынса түңәрәк өҫтәлдә Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡортостан Республикаһы тарихы, археология һәм этнология кафедраһы мөдире, тарих фәндәре докторы, профессор Булат Аҙнабаев Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалынған осорҙа Рәсәйҙәге һәм төбәктәге сәйәси хәл тураһында һөйләне. Ғалим үҙенең сығышында билдәләүенсә, Өфөнө төҙөр алдынан Рәсәй хакимиәте һәм башҡорттар араһында ҡала өсөн бүленгән ҡәтғи сикләнгән ер участкаһы тураһында килешеү төҙөлгән. Ғалим фекеренсә, Өфө ҡәлғәһе хакимиәтен ойоштороу 1590 йылда, Башҡортостанға тәүге Өфө воеводаһы Михаил Нагой ебәрелгәс башлана.

Юридик фәндәр кандидаты, Өфө фән һәм технологиялар университетының уҡытыу-методика идаралығы начальнигы урынбаҫары Айнур Хәйбуллин Өфө ҡалаһында хоҡуҡи мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү тарихы тураһында һөйләне. Юрист ғалим Башҡортостандың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нотариаль учреждениеларҙың ойоштороу һәм эшмәкәрлек барышында барлыҡҡа килгән ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе анализланы.

Өфө ҡалаһы тарихы музейының баш ғилми хеҙмәткәре Валерий Молтусов Өфө ҡала начальниктарының тикшеренеүҙәр тәжрибәһен анализланы.

Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының төп ғилми хеҙмәткәре Марсил Фархшатовтың сығышы ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Марсил Нурулла улы 1874-1886 йылдарҙа Өфө ҡалаһына етәкселек иткән Дмитрий Волковтың ҡала тарихына бәйле архив материалдары коллекцияһына анализ яһаны. Ғалим башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың Волков коллекцияһын булдырыуҙағы ролен билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, ул сығанаҡтарҙы төрки һәм рус телдәренә тәржемә иткән. Ғалим республикабыҙ баш ҡалаһының тулы һәм ентекле тарихын яҙыу мәсьәләһен күтәрҙе, сөнки һуңғы тикшеренеүҙәргә 50 йыл үткән.

Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты доценты Салауат Хәкимов XIX быуатта Өфө ҡалаһы полицияһының эшмәкәрлеге һәм кадрҙар составы хаҡында һөйләне. Ғалим ошондай ҡыҙыҡлы факт килтерҙе: ул осорҙа Рәсәй империяһының губерна ҡалалары полицмейстерҙары араһында бер генә башҡорт теркәлгән. Ул Хиуа походында ҡатнашҡан башҡорт ахуны Абдулла Дәүләтшиндың улдарының береһе - Абдулвәли Дәүләтшин булған.

**Зыялылар, тарихсылар араһында совет осоронан уҡ бер ысынбарлыҡҡа тап килмәгән фекер йәшәп килде: йәнәһе, башҡорттарҙың матди мирасы бик наҡыҫ булған, уларҙың ата-бабалары ҡала-ҡәлғәләр төҙөмәгән һ.б. Хатта бер саҡ Мостай Кәрим дә ошо хаҡта, үкенес белдергәндәй, халҡыбыҙҙың ҡалалары булмаған шул, тип әйтә ҡуйғайны. Бының сәбәбе - ул саҡта башҡорт халҡының боронғо тарихы билдәле түгел ине. Уҙған быуаттың 60-сы - 80-се йылдарында тарихи Башҡортостан территорияһында археологтар ике тиҫтәнән ашыу ҡаласыҡтарҙан торған "Ҡалалар иле"н асты. Иң билдәлеһе - Арҡайым. Әммә ғалимдар был ҡаласыҡтарҙы башҡорттарҙың туранан-тура ата-бабалары менән бәйләп аңлатыу хаҡында уйлап та ҡараманы. 2006 йылда Мәскәүҙә тарихсы И.Г. Коновалованың "Ал-Идриси о странах и народах Восточной Европы" тигән китабы баҫылып сыкты, унда әл Иҙрисиҙең Эске һәм Тышҡы Башҡорт иле ҡалалары хаҡында бик ентекле мәғлүмәттәре килтерелә. Шул уҡ ваҡытта "Өфө-II ҡаласығы"нда археологик тикшеренеүҙәр алып барған Н.А. Мәжитов ошо ҡаласыҡ урынында урта быуаттарҙа Башкорт ҡалаһы булыуын иҫбатланы. Шулай ҙа әлегә тиклем ошо тарихи ысынбарлыҡты инҡар итеүселәр бар. Һеҙ ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Мин һүҙемде ситтәнерәк башлайым әле. Беҙ мәктәптә уҡыған йылдарҙа "Урал батыр" эпосын яҡынса 500 йыл элек сығарылған, тип әйтә инеләр. Әммә 1982 йылда Максим Горький исемендәге Бөтөн донъя әҙәбиәте институты директоры урынбаҫары, "СССР халыҡтары эпостары" тигән академик баҫманың баш мөхәррире Арфо Петросян "Гилгәмеш хаҡындағы поэма" исемле аккад-шумер эпосының (ә ул б.э. тиклем XVIII-XVII быуаттарҙан башлап, мең йыл ярым буйына ижад ителә, уның иң тулы варианты б.э. тиклем VII быуат менән билдәләнә) һәм "Урал батыр" эпосының сюжет линиялары, төп геройҙары башҡарған ғәмәлдәрҙең тура килеүен билдәләй. Ошо яҙыусы һәм ғалимә бер-береһенән бик алыҫта йәшәгән ҡәүемдәр эпостарының бер үк заманда ижад ителеүен фаразлай. Хатта ки, беҙҙең эпосыбыҙҙың "Гилгәмеш"тән дә иртәрәк сығарылыуы мөмкин: бынан 2 мең - 2,5 ярым элек.

**Эйе, мәрхүм тикшеренеүсебеҙ Салауат Ғәлләмов та ошо хаҡта байтаҡ әҫәрҙәр ижад иткәйне. Ваҡытында уның яҙмаларына ғәҙел баһа бирелмәне шул.**

- Ҡалалар мәсьәләһенә килгәндә, Урал батыр тере һыу эҙләп сыҡҡан сәйәхәте барышында ниндәйҙер ҡалаларға юлыға, унда хан, батша булып ултырған, халыҡты интектергән яуыз заттар менән көрәшкә сыға, уларҙы еңеп, батыр исемен ала. Тимәк, боронғо эпоста ҡалалар тураһында бәйән ителгәс, башҡорттарҙың ата-бабалары ла ҡалалар менән таныш булған һәм уларҙың билдәле бер өлөшө ҡалаларға йәшәгән, тип фараз итергә була. Әммә совет осоро идеологияһы икенсе бер тәғлимәтте алғы планға сығара: башҡорттар - бер ниндәй яҙмаһы булмаған, мәғрифәттән, мәҙәниәттән, сәнәғәттән ситләтелеп йәшәгән этнос булған, тигән фекерҙе халыҡ аңына һеңдереүҙе алға һөрә. Бынан аңлашылып тора: цивилизацияһыҙ халыҡтың ҡалалары булыу мөмкинме һуң?

Шул уҡ ваҡытта бәғзе бер совет ғалимдары, тарихсылар объектив ысынбарлыҡты идеология штамптарынан өҫтөн күрә. Мәҫәлән, билдәле совет һәм Рәсәй археологы, күсмә халыҡтар буйынса абруйлы белгес С.А. Плетнева уҙған быуаттың 70-се йылдарында уҡ башҡорт халҡының, Кавказ аландары кеүек, Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш булған ерҙәрҙә бик боронғо дәүерҙәрҙә үк юғары үҫешкән этнос булараҡ формалашыуы хаҡында яҙып сыға (С.А. Плетнева 1968 йылда "От кочевий к городам" тигән темаға докторлыҡ диссертацияһы яҡлай). Күренекле ғалимә ошо ерҙәрҙә бик иртә ойошоп йәшәгән башҡорттарҙың һуңынан, тарихи катаклизмдарға һәм сәйәси яҡтан төрлө дәүләттәргә буйһоноулы булыуына ҡарамай, үҙ биләмәләренә хужа булып йәшәп, хәҙерге замандарға тиклем тотороҡло һәм алға китешле үҫеш кисереүен тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләй. Беҙҙә, ни эшләптер, ошондай тарихи асыштарға үҙ ваҡытында тейешле баһа бирелмәне. Мәскәү ғалимдары башҡорт тарихына ҡарата аҙмы-күпме объектив фекерҙәр белдергән хәлдә лә, үҙебеҙҙең ғалимдарыбыҙ ошондай идеяларға таянып эш итергә баҙнат итмәне. Быны ниндәйҙер кимәлдә урындағы цензураның тикшеренеүҙәр өлкәһенә кире йоғонтоһо менән аңлатып була.

**Ошо йәһәттән XII быуат географы әл Иҙрисиҙең Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт илдәрендә билдәле булған ҡалалар тураһындағы мәғлүмәттәре "ҡалаһыҙ башҡорттар" тигән уйҙырманы юҡҡа сығара. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйын-**

✓ ***Башҡорт юлбашсылары халыҡты нисек итеп булһа ла ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡарырға ҡарар итә. Бер генә юл - Сыңғыҙ хан ярандары менән һөйләшеүҙәргә сығыу, килешеү төҙөү.***

# ҺӘМ ҠАЛАЛАР,

## хәҙерге заманға сәйәхәт

**са Ағиҙел һәм Кама буйҙарында 22 башҡорт ҡалаһы булған.**

- Йәнә бына нимәне һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк. Урта быуаттарҙағы ҡала һәм хәҙерге заман ҡалаһы - улар икеһе ике төрлө күренеш. Берҙән, урта быуаттарҙа ҡала исемен йөрөткән ҙур тораҡ пункты бик ҙур территорияла таралып йәшәгән халыҡтың административ үҙәге булған, быны ҡануни факт тип ҡарау фарыҙ. Унан һуң, Көньяҡ Урал башҡорттарын күсмә халыҡ тип әйтеп булмай. Рус тарихсыһы Николай Гумилев билдәләүенсә, ул XIII быуатта монгол-татар ғәскәренә 14 йыл буйына ҡаршылыҡ күрһәтә алған ғәскәрле, ҡоралды халыҡ. Башҡорттар һуғыш ҡоралдарын үҙҙәре етештерә, руда эшкәртә, баҡыр, тимер-суйын ҡоя. Был башҡорттарҙың урта быуаттарҙа тулыһынса ултыраҡ тормошта йәшәүен раҫлаусы дәлил. Рустарҙың XIII-XIX быуаттарҙа йәшәгән билдәле вәкилдәре, ғалимдары, мәҫәлән, Петр Рычков, Урал металлургияһының башҡорттар булышлығында барлыҡҡа килеүе һәм үҫтерелеүе хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған: башҡорттар рус таусыларына тимер, баҡыр һәм башҡа ҡаҙылма байлыҡтар ятҡылыҡтарын күрһәтә. Был ерҙәрҙә ул саҡта боронғо руда иретеү мейестәре - домна ҡалдыҡтарын күрергә була. Тимәк, башҡорттар араһында борон-борондан төрлө матдәләрҙең химик, физик, термик һәм башҡа үҙенсәлектәрен белеүсе аҡыллы заттар булған.

**Әлбиттә, ошондай ғилемдең халыҡ аңында күп быуаттар буйына тупланған бай тормош тәжрибәһе һөҙөмтәһе булыуы раҫтыр.**

- Тап шулай. Тик XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдарында үҙҙәре етештергән ҡоралдарҙы ҡулланыусы башҡорттарға тимерлектәр тотоу, һуғыш ҡоралдары эшләү ҡануни рәүештә тыйылғас, борондан килгән рудасылыҡ, металлургия менән шөғөлләнеү традицияһы өҙөлөп ҡала. Бына быйыл Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итәбеҙ. Был дата Өфө ярымутрауында ҡәлғә төҙөлә башлауы менән бәйле. Әммә ошо урында боронораҡ замандарҙа ла бушлыҡ булмаған. Өфө урынлашҡан ер урта быуаттарҙа ла яҡын-тирәлә йәшәгән кешеләр өсөн бик уңайлы булған, уны үҙенә күрә бер тәбиғи ҡәлғә итеп ҡарап була. Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Күгиҙел (Дим) йылғалары арауығында, урман-ҡыуаҡлы ҡалҡыулыҡтарҙа йәшәгән кешеләргә бер кем дә ҡапылдан килеп һөжүм итә алмаған, тәүҙә ошо йылғаларҙы кисеп сығырға, унан текә ярҙарҙан өҫкә менергә кәрәк булған. Дошмандарҙан һаҡланыр өсөн тик бер яҡтан ғына валдар, яһалма ҡоролмалар эшләү етә. Изге урын буш булмай тигәндәй, был ерҙең бик күп быуаттар элек тә билдәле бер ҡәбиләләрҙең төйәге булыуын археологтар раҫланы. Башҡорт риүәйәттәрендә бында ҡасандыр Имән-ҡала булыуы, башҡорт йә иһә нуғай хандарының ошо урында үҙҙәренең ставкаһын (урҙаһын) ҡороуы хаҡында бәйән ителә. Яҡын-тирәлә йәшәгән халыҡ менән идара итеү өсөн ниндәйҙер бер үҙәк булыуы фарыҙ, һәм әлеге Өфө ярымутрауындағы ҡала ошондай административ үҙәк булған.

**Күренекле тарихсы-археолог Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов иң кәмендә IV-V быуаттарҙан XVI быуат баштарына тиклем бында Башҡорт тип исемләнгән сауҙа, һөнәрселек һәм идара итеү үҙәге ролен үтәгән ҡала булыуын иҫбат итте, быға Өфө территорияһындағы боронғо ҡомартҡыларҙа табылған артефакттар ышаныслы дәлил булып тора. Көньяҡҡа ла, төньяҡҡа ла һыу юлдары буйлап бик алыҫ араларға барып етеп була, күрәһең, каруан юлдары ла ошонан үткән.**

- Өфө ҡалаһының Тарихи Башҡортостандың үҙәгендә урынлашҡанын иғтибарға алырға кәрәк. Иртә урта быуаттарҙа бында йәшәгән ҡәүемдәр ҙә алыҫ араларға алыш-биреш итергә йөрөгән, һыу юлдарынан башҡа, каруан юлдары ла булған. Атаҡлы Ҡәнифә юлы булыуы хаҡындағы мәғлүмәт халыҡ хәтерендә әлегә тиклем һаҡлана. Башҡорт ырыуҙары юлбашсыларының 1554-1557 йылдарҙа Рус дәүләтенә ҡушылыу мәсьәләһе буйынса Иван Грозныйҙың Ҡазандағы наместнигына һәм Мәскәүгә тиклем барып йөрөүҙәре билдәле. Тимәк, башҡорттар был тирәләге юлдарҙың ниндәй урындарға илтеүе, төндәрен ҡайҙа ял итергә туҡталып булыуы хаҡында бик яҡшы белгән.

**Ҡалалар тураһында әңгәмә ҡорһаҡ та, уларға илтеүсе юлдар хаҡында ла иҫкә алыу урынлылыр. XIX быуатта йәшәгән күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе, яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың бик фәһемле бер фекере барыбыҙға ла билдәле: "Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе - үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе - йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө - хандар хаҡындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү". Бына мине башҡорттарға ни өсөн йондоҙҙарҙы исемләп атап, яҡшы белеү кәрәклегенең мөһим булыуы аптырата ине. Хәҙер аңлашыла ки: ата-бабаларыбыҙ - яугир халыҡ, улар ҡайҙа бармаған да, ниҙәр күрмәгән, көнө-төнө юлда булырға тура килгән. Хәниф Кәримдең бер шиғыры иҫкә төшә: "Төн ҡаплағас киң океан өҫтөн, пароходтар юлдан аҙашһа, оҫта капитандар барыр юлды яҡты йондоҙҙарға ҡарап табалар". Әйе, башҡорт кешеһе лә, ҡайҙа ғына йөрөмәһен, төндәрен барыр юлын, йүнәлешен йондоҙҙарға ҡарап дөрөҫ билдәләй белгән, ә ошондай ғәмәли белемде ҡуллана белеүҙең урта быуат башҡорттары өсөн кәрәкле һәм бик файҙалы күнекмә булғанлығына шик юҡ...**

- Мин бына тағы ла бер мөһим проблемабыҙ булыуы хаҡында әйтер инем. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың әйткәненә өҫтәп, беҙ боронғолоҡто белеү генә түгел, уны һаҡлау һәм яҡлау мохтажлығы булыуын онотмаһаҡ ине. Был яҡтан эшмәкәрлегебеҙ ҡәнәғәтләнерлек түгел. Уҙған быуаттың 30-сы йылдарынан алып беҙҙең тарихыбыҙҙы бүлгеләргә, башҡалар файҙаһына ҡулланырға, хатта ки үҙ халҡының тарихы итеп күрһәтергә теләү тенденцияһына ҡаршы тора алмайбыҙ. Ә ут күршеләребеҙ бик йылдам эш итә: бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе, үҙҙәренең башҡортлоғон яҙма рәүештә теркәп ҡалдырған хәлдә лә, татар сығышлы итеп күрһәтәләр, ә беҙ быға ҡаршы торорға, ялғанды фаш итеүгә әллә ни илтифат итмәйбеҙ. Барса Көнсығыш донъяһында шиғриәте менән дан тотҡан Әйле башҡорто Ҡол Ғәлигә Ҡазан ҡалаһында һәйкәл ҡуйылған, ул күренекле "татар шағиры" тип нарыҡлана.

Беҙҙең халҡыбыҙҙың бик күп күренекле шәхестәре Рәсәй кимәлендә танылыу таба. XIX быуат аҙаҡтарында - XX быуат баштарында рус армияһында башҡорт сығышлы 5 генерал була, яңылышмаһам, уларҙың өсөһө Генераль штаб академияһында ҙур вазифалар биләй. Йәнә, мәғариф өлкәһен алһаҡ, бынан ике быуат тиерлек элегерәк Муллаҡай мәҙрәсәһенән төрки халыҡтар өсөн алыштырғыһыҙ мәғрифәт йорто итә алған шәхесте - суфый шәйехе Ғабдулла Сәйдиҙе миҫалға алырға кәрәк. Ул, беренселәрҙән булып, ошо мәҙрәсәлә яңыса уҡытыу алымын - йәҙитселекте ғәмәлгә индерә. Үҙе геология, төҙәлөш, тау эше, химия, тәбиғәтте өйрәнеү, халыҡ медицинаһы нигеҙҙәренән һабаҡтар бирә. Бында шулай уҡ арифметика, рус теле, дөйөм тарих, физика, ҡануниәт нигеҙҙәре, педагогика, логика предметтары буйынса белем бирелә, физкультура дәресе лә индерелә. Күрәһегеҙ, шәкерттәргә киң ҡуләмдә белем биреү менән бергә, хәҙергесә әйткәндә, һөнәри йүнәлеш мәсьәләһе лә хәл ителә. Ошо мәҙрәсәлә уҡып сыҡмаһалар, беҙ бөгөн миллионер сәнәғәтселәр, бер туған Рәмиевтарҙы белер инекме? Улар башҡорттарға, башҡорт милли хәрәкәтенә ҙур күләмдә матди ярҙам күрһәтә. Уҙған быуаттың 20-се йылдарында нәшер ителгән "Сәсән" журналында Дәрдмәнд псевдонимы менән ижад иткән Закир Рәмиев башҡорт-татар шағиры тип нарыҡлана. Беҙ Башҡортостанда тыуып үҫкән, белем алған, алтын табыу сәнәғәтен үҫтергән, башҡорт ауылдарында мәсеттәр һалдырған, мәҙрәсәләр астырған, үҙ иҫәбенә күп кенә башҡорт һәм татар балаларын төрлө уҡыу йорттарына ебәргән шәхесте үҙебеҙҙеке, Башҡортостандыҡы итеп баһаламайбыҙ. Ә бит үҙ ватанына тоғро ҡалған шәхестең улдары ла Баймаҡта йәшәй. Уның бер улы Муса Мортазин бригадаһында штаб начальнигы булһа, ейәне 112-се Башҡорт атлы дивизияһы составында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, майор званиеһына лайыҡ була.

Тағы ла бер нәмәне иғтибарға алырға була: 1917 - 1920 йылдарҙағы башҡорт хәрәкәтендә көнбайыш башҡорттары бик әүҙем ҡатнаша, башҡорт ғәскәре командирҙары араһында ошо төбәктә тыуып үҫкән офицерҙар күп була. Уларҙың ата-бабалары шәжәрәләрҙә, мәсет кенәгәләрендә, рәсми документтарҙа аҫаба башҡорт булараҡ теркәлгән. Бынан 100 йыл элегерәк уларҙа башҡортлоҡ рухы бик көслө булған. Ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, махсус алып барылған сәйәсәт һөҙөмтәһендә көнбайыш башҡорттарының байтаҡ өлөшө татарлашыуға дусар ителде. Был хәл шулай уҡ юғалтыуҙар исемлегенә инә.

**Һаҡланып ҡалған шәжәрәләрҙе, боронғо ҡульяҙмаларҙы, һирәк осрай торған китаптарҙы өйрәнгәндә элегерәк тикшеренеүселәр иғтибарынан ситтә ҡалған нәмәләр осраймы?**

- Әлбиттә. Һәр тикшеренеүсе, башлыса, үҙ маҡсатына тура килгән мәғлүмәттәрҙе табырға тырыша. Ә бына, мәҫәлән, башҡа ҡәүемдәр, уларҙың юлбашсылары, сардарҙары менән ниндәйҙер бер сәйәси, иҡтисади йә иһә рухи мөнәсәбәткә ингәндә халҡыбыҙ үҙенең дипломатияға һәләтле икәнен дә таныта алған. Ошо йәһәттән XIII быуат ваҡиғалары бик фәһемле. Тәүҙә башҡорттар Сыңғыҙ хан яуына ҡаршы күтәрелә, алыштарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Әммә башҡорт юлбашсылары халыҡты нисек итеп булһа ла ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡарырға ҡарар итә. Бер генә юл - Сыңғыҙ хан ярандары менән һөйләшеүҙәргә сығыу, килешеү төҙөү. Башҡорт илселәре ошо ауыр миссияны уңышлы үтәп сыға: биләгән ерҙәренә хужа булыу хоҡуғы (аҫабалыҡ), дин тотоу иреге, йолаларының тейелгеһеҙлеге таныла, эске үҙидаралыҡ тәртибе һаҡлана. Рус дәүләтенә ҡушылған саҡта ла халҡыбыҙ дипломатик юл менән үҙенең элекке хоҡуҡтарын танытыуға һәм һаҡлап ҡалыуға өлгәшә.

Бында бына нимәне һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк. Башҡорттар - ошо ерҙәрҙең төп хужаһы, быны Тарихи Башҡортостан территорияһына йәнәш йәшәгән барса халыҡтар ҙа таныған. Башҡорттар үҙҙәрен Урал батыр нәҫеле итеп нарыҡлай. "Урал батыр" эпосында халҡыбыҙҙың ошо Урал тауы һәм уға йәнәш ерҙәрҙә таралып китеп, үрсеп-ишәйеп йәшәүе хаҡында бәйән ителә. Уҙған быуаттың 20-се йылдары аҙағындағы бер мәҡәләһендә Дауыт Юлтый 1812 йылда Ватан һуғышына китеп барыусы башҡорттар йырлаған бер йырҙың һүҙҙәрен килтерә. Унда шундайыраҡ юлдар бар: "Урал баба һеҙҙе ғәфү итмәҫ, әгәр ҙә һеҙ енелһәгеҙ". Был "Хоҙай һеҙҙе ғәфү итмәҫ" тигәнгә тап килә. Халҡыбыҙ Уралды тәңрегә тиңләгән бит. Боронғо башҡорттар өсөн Урал батыр мифик зат ҡына түгел, һәм уға арналған эпосты халҡыбыҙҙың ул замандарҙағы төп идеологияһы тип ҡарау фарыҙ.

***Көньяҡ Урал башҡорттарын күсмә халыҡ тип әйтеп булмай. Рус тарихсыһы Николай Гумилев билдәләүенсә, ул XIII быуатта монгол-татар ғәскәренә 14 йыл буйына ҡаршылыҡ күрһәтә алған ғәскәрле, ҡоралды халыҡ. Башҡорттар һуғыш ҡоралдарын үҙҙәре етештерә, руда эшкәртә, баҡыр, тимер-суйын ҡоя. Был башҡорттарҙың урта быуаттарҙа тулыһынса ултыраҡ тормошта йәшәүен раҫлаусы дәлил. Рустарҙың XIII-XIX быуаттарҙа йәшәгән билдәле вәкилдәре, ғалимдары, мәҫәлән, Петр Рычков, Урал металлургияһының башҡорттар булышлығында барлыҡҡа килеүе һәм үҫтерелеүе хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған: башҡорттар рус таусыларына тимер, баҡыр һәм башҡа ҡаҙылма байлыҡтар ятҡылыҡтарын күрһәтә. Был ерҙәрҙә ул саҡта боронғо руда иретеү мейестәре - домна ҡалдыҡтарын күрергә була.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

*✓ Әл Иҙриси башҡорттарҙың ҡалалары хаҡында һөйләнеп яҙа, ә уларҙың үҫешен әле беҙ телгә алған мәҙәни бәйләнештәр тәьмин иткән. Башҡорт ҡалаларында ағастан һәм балсыҡтан һалынған йорттарҙан башҡа тирмәләр ҙә була.*



# БАШҠОРТТАР ҺӘМ ҠАЛАЛАР,

## йәки Сал тарихтан хәҙерге заманға сәйәхәт

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Рус дәүләте составына ингәс, тәүге осорҙа башҡорттар рустар менән тыныс шарттарҙа, килешеп йәшәү сәйәсәтен үҙ итә. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- XVI быуаттың 70-се йылдарында башҡорт юлбашсылары тағы ла бер ҡыйыу аҙым яһай: улар үҙ ерҙәрендә ҡәлғә төҙөүҙе һорап, батша Иван Грозныйға мөрәжәғәт итә. Бының сәйәси сәбәптәре - нуғайҙарҙың, ҡалмыҡтарҙың, шул уҡ Күсем хандың башҡорт ерҙәренә йыш һөжүм итеп тороуы, халыҡты талауы, әсиргә алып китеүе. Яҡлау тапмаған хәлдә, халыҡ ҙур юғалтыуҙарға дусар ителер ине. Йәнә яһаҡ йыйыу, идаралыҡ, суд эштәрен алып барыу, өсөн халыҡ йәшәгән ерҙә административ үҙәк кәрәк була. Өфө ҡәлғәһен төҙөтөүҙе башҡорттарҙың һәм рустарҙың берҙәм сәйәси эшмәкәрлек алып барыуын раҫлаусы ышаныслы дәлил итеп ҡарарға кәрәк. Тарихсыбыҙ Булат Аҙнабаев фекеренсә, ошо килешеүле эшмәкәрлек арҡаһында рустар хатта үҙҙәре ҡабул иткән ҡәлғә-ҡалалар төҙөү тәртибен үҙгәртергә мәжбүр була: улар ҡалаларҙы бер-береһенә яҡын һалһа, был осраҡта Өфөгә иң яҡын булған Ҡаҙанға тиклем 500 саҡрымдан ашыу юл үтергә кәрәк. Тимәк, Өфө цитадель ролен үтәй алмай, ул яулап алыу өсөн төҙөлмәй. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр Өфө ярымутрауында бер ниндәй тораҡ пункттары булмаған, тип раҫларға тырыша. Әлбиттә, баш ҡалабыҙҙың хәҙерге үҙәгендә бик ҙур зыярат - некрополь булған, әммә яҡын-тирәлә ауылдар булыуын инҡар итеп булмай: хужалыҡ итеү өсөн бик уңайлы шарттар һәр урында ла булмай бит. Ҡәлғә төҙөләсәк урынды ла башҡорттар үҙҙәре күрһәтә.

**Күп кенә боронғо тарихи яҙмаларҙа урта быуат башҡорттарының Урта Азия, Каспий һәм Ҡара диңгеҙ буйҙарындағы ҡалаларға барып етеп, шул тарафтарҙа йәшәгән ҡәүемдәр менән сауҙа итеүе хаҡында мәғлүмәттәр бар. Һис шикһеҙ, башҡорттар сит-ят ерҙәрҙә йәшәгән халыҡтар мәҙәниәтенең иң әһәмиәтле яҡтарын да үҙләштерә алғандыр. Халҡыбыҙ бар замандарҙа лә сикләнеп кенә йәшәмәгән, ошо хаҡта Н.А. Мәжитов үҙенең ғилми хеҙмәттәрендә лә яҙҙы: Башҡорт ҡалаһының архитектураһы, төҙөлөш материалдары, балсыҡ иҙелмәләрен әҙерләү рәүеше Урта Азия халыҡтарыныҡына бик оҡшаш.**

- Һүҙегеҙҙе ҡеүәтләп, Арҡайым ҡаласығын миҫалға алырға була. Ул зороастр динен тотоусы халыҡтар ҡалалары менән бер иш. Авестала ҡаланы нисек итеп төҙөү хаҡында күрһәтмәләр бар. Унда иң беренсе ҡаланы өс ҡулсалы итеп төҙөргә, һәр ҡулса эсендә күпме кеше һәм мал булырға тейешлеген билдәләргә, дүрт тарафҡа дүрт ишек (ҡапҡа) ҡуйырға бойорола. Арҡайым ҡаласығын өйрәнгән археолог Здановичтың һүрәттәрендә уның өс ҡулсанан хасил булыуы, дүрт яҡтан ҡаласыҡ эсенә инеү урындары булыуы күҙгә ташлана. Зороастр динен тотоусылар, башлыса, боронғо Персияла (хәҙерге Иранда) йәшәй. Ошо диндең барлыҡҡа килеүе, үҫеше һәм тарҡалыуы б.э. тиклем VI быуаттан башлап б.э. VII быуаты урталарына ҡәҙәре ваҡытты үҙ эсенә ала. Тимәк, Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәүемдәр беҙҙең эранан күпкә алдараҡ уҡ Яҡын һәм Урта Көнсығыш менән бәйләнеш тотҡан була. Тап ошо фактты раҫлаусы дәлил рәүешендә "Урал батыр" һәм "Гилгәмеш хаҡындағы поэма"ның тап килешлеген атап киткәйнек инде. Бында беҙ Көньяҡ Урал һәм Азия халыҡтары араһындағы матди һәм рухи мәҙәниәттәр бәйләнеше булыуы хаҡында ла һүҙ йөрөтә алабыҙҙыр.

Беҙҙең тарафтарҙа бик боронғо замандарҙан алып урындағы төҙөлөш материалдары - ағас һәм таш ҡулланылған. Арҡайым - балсыҡ ҡала. Был Урта Азия халыҡтары технологияһына тура килә. "Өфө-II ҡаласығы" ла, башлыса, балсыҡтан төҙөлгән. Иң мөһиме - Уралдан көньяҡҡа, Урта Азия тарафтарына илткән юлдар - каруан юлдары була һәм ул сауҙа үҫешен тәьмин итә. Әлеге Башҡорт ҡалаһының ана шул сауҙа итеү үҙәктәренең береһе булыуына Н.А. Мәжитов ышаныслы дәлилдәр тапты. Боронғо Башҡорт иленә төрлө көньяҡ илдәре һөнәрмәндәре, шул уҡ төҙөүселәр ҙә килеп, бында тороп ҡалыуын фаразларға була. Башҡорттарҙың һәм Азия халыҡтары фольклорының ауаздашлығы ла рухи-мәҙәни бәйләнештәр һөҙөмтәһе ул. Әл Иҙриси башҡорттарҙың ҡалалары хаҡында һөйләнеп яҙа, ә уларҙың үҫешен әле беҙ телгә алған мәҙәни бәйләнештәр тәьмин иткән. Башҡорт ҡалаларында ағастан һәм балсыҡтан һалынған йорттарҙан башҡа тирмәләр ҙә була. Ә тирмә беҙҙең климатҡа ярашлы ҡоролма: ҡышын сыуал менән йылытып була, йәйен һалҡынса. Әлбиттә, ҡала төҙөлөшө урындағы климат, тәбиғәт шарттары менән бәйле, һәм шуға күрә төрлө төбәктәрҙәге бер үк заман ҡалалары араһында айырмалар байтаҡ була.

**Тәбиғи һәм ижтимағи-сәйәси катаклизмдар, һуғыш-ҡырылыштар барышында боронғо башҡорт ҡалаларынан тик харабалар ғына тороп ҡала. Башҡорт ҡалаһы ла ер йөҙөнән юҡ була. Һуңынан башҡорттар ҡала төҙөүҙән ваз кисә. Өфө ҡәлғәһен рустар үҙҙәре төҙөһөн өсөн батшаға мөрәжәғәт итәләр. Бының сәбәптәре нимәлә?**

- Рус дәүләте составына ингәс, ата-бабаларыбыҙ Иван Грозныйҙы "Аҡ батша" тип нарыҡлай. Ул халҡыбыҙҙың дәүләт башлығына ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә булыуын аңлата: аҡ төҫ - сафлыҡ, яҡшылыҡ символы. Бик ышаныслы кешегә шундай ҡушамат бирелә. Рус батшаһын рустар үҙҙәре "Яуыз Иван" тип атаған хәлдә, башҡорттар уға яҡшы баһа бирә. Ни өсөн? Иван Грозный башҡорт ерҙәренә теймәй, халҡыбыҙға үҙ диндәрен тоторға, үҙ йолаларын үтәргә, үҙҙәренә хас традицион идара итеүгә ризалыҡ бирә, ирекһеҙләмәй. Башҡорттар араһында "Аҡ батша"ның абруйы ҙур була, ул ышаныслы зат итеп ҡабул ителә. Әлбиттә, башҡорттар унан хаслыҡ көтмәй, шуға күрә ҡәлғә төҙөү хаҡында үҙҙәре мөрәжәғәт итә. Был осорҙа башҡорттарҙа ҡала төҙөү традицияһы бөтөнләйгә өҙөлөп, матди мәҙәниәттән төшөп ҡалған була, әүәлерәк ҡалаларҙың артыҡ кәрәге лә булмай. Тарихсыбыҙ Роза Буканова әйткәнсә, башҡорттарҙа ҡәлғә функцияһын тауҙар, ҡуйы урмандар үтәй. Унан һуң, бында ҡәлғә төҙөү башҡорттарға ла, батша хакимиәтенә лә кәрәкле һәм файҙалы була, был ике яҡтың килешеп эш итеүенә лә булышлыҡ итә. Төҙөлөш өсөн байтаҡ ҡына сығымдар талап ителеүе лә хәл иткес сәбәптәрҙең береһе булғандыр.

**Тарихсы Булат Аҙнабаев, Өфө ҡалаһының изге урында, ысынбарлыҡта боронғо некрополь өҫтөндә төҙөлөүен билдәләп, ҡасандыр ошондай урындарҙың "өфө" тип аталыу мөмкинлеге хаҡында үҙ фаразы менән бүлеште. Рус дәүләт эшмәкәре, тарихсы Петр Рычков та Ағиҙел буйында урынлашҡан ҡаланың Өфө тип аталыуына ғәжәпләнә. Шәхсән үҙем "Өфө" һүҙенең этимологияһын "өф итеп тороу" тигән һүҙбәйләнешкә бәйләп аңлатып булалыр, тим. Һуңғыһы бик ҡәҙерле, ҡиммәтле нәмәләргә ҡарата ҡулланыла. Тимәк, Өфө ҡалаһы бик ҡәҙерле, изге урында төҙөлгән өсөн шулай аталғандыр, тигән фаразға ла урын бар кеүек. Башҡорттар стрелецтар етәксеһенә "Бына ошо өфө ерендә ҡәлғә һала алаһығыҙ", - тип әйткәндер. Рустар "Өфө" тип әйтә алмай, уларға "Уфа" тип әйтеү ҡулай була. Ҡариҙел йылғаһын Өфө (Уфа) ти, башлыса рустар атай башлай, һәм был топоним карталарға ла индерелә.**

- Беҙҙең фольклорҙа йәнәшәлек, парлылыҡ күренеше күҙәтелә, был топонимияға ла хас. Аҡтау-Ҡаратау, Иҫке йорт-Яңы йорт, Үрге Ҡыйғы-Түбәнге Ҡыйғы, Ағиҙел-Ҡариҙел һ.б. Шуға күрә һеҙҙең фаразығыҙ ҡыҙыҡлы һәм нигеҙле булып тойола. Башҡорттар бер ваҡытта ла бер үк йылғаны ике исем менән атамай. Ғөмүмән, топонимдар бик тотороҡло була, күп быуаттар буйына бер үҙгәрешһеҙ һаҡланып ҡала. Шул уҡ ваҡытта Силәбе өлкәһенә ҡараған Өфө күле, Өфәле (Өпәле) йылғаһы, Башҡортостанда тағы ла бер бәләкәй генә Өфө йылғаһы булыуы ла билдәле.

**Башҡорттар - тәбиғәт балалары, тибеҙ. Халҡыбыҙҙың ҡалаларға мөнәсәбәте төрлө дәүерҙәрҙә төрлөсә булыуын күрәбеҙ. Ерҙәре таланыуы, хоҡуҡтары ҡыҫырыҡланыуы арҡаһында улар урындағы чиновниктарға, заводчиктарға ҡаршы сыға, Пугачев яуы осоронда заводтарҙы баҫып алып, домналарҙы эшлектән сығара. Дөйөм алғанда, улар ҡалаларҙы бик өнәп етмәй. 1917 йылғы инҡилапҡа тиклем ҡала башҡорттары юҡҡа иҫәп тип әйтергә була. Мәҫәлән, 1897 йылғы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алғанда Өфөлә ни барыһы 3151 башҡорт кешеһе теркәлгән. Ғөмүмән, Совет осоронда ла башҡорттарҙа ҡалалашыу процестары бик аҡрын бара. 1920 йылда Өфөлә 1200, 1926 йылда - 4632, 1939 йылда - 15 400, 1959 йылда - 30 302, 1979 йылда - 92 500 башҡорт кешеһе теркәлә. Ошонан һуң теүәл 45 йыл үтеүгә Өфө башҡорттарының һаны 199 689 кеше тәшкил итә. Теркәлеү урындары ауылдарҙа булған башҡорттарҙы ла өҫтәһәк, 200 меңдән ашыу кеше тип әйтергә була. Ярты быуат дауамында Өфө башҡорттарының һаны 100 мең кешенән саҡ ҡына күберәккә артҡан булып сыға. Әлегә тиклем башҡорттарҙың 40 проценттан ашыуы ауылдарҙа көн итеүҙе хуп күрә. Урбанлашыу, йәғни ҡалалашыу процестарын прогрессив күренеш тибеҙ, ә ул бик һүлпән бара. Быны нисек аңлатырға була?**

- Башҡорттар элек-электән иркенлекте ярата: ауылдар бик бәләкәй, ҙур ауылдар юҡҡа иҫәп. Менталь яҡтан башҡорт кешеһе быуаттар дауамында ҡала мөхитен, ҡала тормошон үҙһенмәй. Мәҫәлән, милләттәштәребеҙ әлегә тиклем Мәскәү ҡалаһына барып урынлашыуҙы кеше күплеге арҡаһында хушһынмай. Йәнә бер фактор пәйҙә булды: ковид эпидемияһы ҡала кешеләренең күпләп ошо сирҙе йоҡтороуын, ауылдағыларҙың был яҡтан хәүефһеҙерәк булыуын күрһәтте. Байтаҡ ҡына ҡала кешеләре оҙайлы ваҡыт дауамында фатирында бикләнеп ултырырға мәжбүр булды. Ошонан һуң ҡайһы бер башҡорт ғаиләләре ауылға кире тартылды.

Ҡала мөхитенең кеше шәхесенә ыңғай йоғонто яһауы билдәле: бында хакимиәт органдары эргәлә генә, театрҙар, музейҙар, мәҙәниәт һарайҙары күп, сәнғәт, әҙәбиәт менән танышыу анһат, йәмғәт ойошмалары эшмәкәрлегендә ҡатнашырға була һ.б. Мәғариф кимәле юғары, балаларҙы уҡытыу шарттары яҡшыраҡ, мәҙәниәт өлкәһенә үҙ өлөшөндө тиҙерәк һәм сифатлыраҡ индереү мөмкинлеге бар. Дөрөҫ милли тәрбиә алған ҡала башҡорттарының балалары киләсәктә мәҙәниәтте үҫтереүҙә әүҙем ҡатнашасаҡ. Әммә ҡала тормошононң милләтебеҙ өсөн үтә хәүефле бер яғын күрмәйенсә булмай: туған телендә рухи тәрбиә алмаған, телен юғалтҡан башҡорттар арта барып, халҡыбыҙҙың бер өлөшөн юғалтыуыбыҙ бар. Унан һуң, тап ҡала мөхитендә ҡатнаш никахтар арта бара, бындай ғаиләләрҙә башҡорт рухына урын булмаясаҡ. Ауыл мөхитендә телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн шарттар уңайлыраҡ, ғөрөф-ғәҙәтәр, йола-традициялар юғалып бармай. Милли традицияларыбыҙ юғалһа, рухи көрсөккә килеп терәлеү хәүефе янай. Туған тел һәм милли йолалар - рухты тотоп тороусы төп факторҙар.

Әлбиттә, балаларҙы башҡорт мәктәбендә уҡытыу бер ни тиклем проблеманы хәл итә ала, әммә тел буйынса, аралашыу буйынса ғаилә мөхитендә бер талапты мотлаҡ үтәү фарыз - үҙ-ара һәм балалар менән тик башҡортса ғына аралашыуҙы ҡәтғи талап итеп ҡуйыу. Бына минең ике улым рус телле 35-се мәктәптә уҡый. Өйҙә берәй һүҙҙе русса әйтһәләр, шундуҡ башҡортсаһын ҡабатлатып әйттереү алымын ҡулландым. Даими рәүештә шулай итһәң, балалар үҙҙәре күнегеп китеп, башҡортса теләп һөйләшә башлай. Балаларыбыҙ ике телле булып үҫә - руссанан башҡортсаға күсеү, йә иһә башҡортса һөйләшеүҙән руссаға күсеү улар өсөн бер ниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Ҡала башҡорттары өсөн иң мөһиме - ғаиләлә туған тел мөхитен һаҡлау һәм балаларҙа башҡорт теленә ҡарата һөйөү уята алыу. Тик шул шартты теүәл үтәгәндә генә ҡала башҡорттарының милли рухи менталитеты күсәгилешле буласаҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмәләште.**

✓ *Эскән һыуҙарға, туйындырған тупраҡҡа, һулаған һауаға рәхимһеҙлек күрһәтелгән икән, ундай йәмғиәттә рухи тормошто, телде, мәҙәниәтте, туған телен һанға һуҡмау бер ҙә ғәжәп түгел.*



ХӘТЕРЛӘП...

# ШӘКҮР ЙӨРӘГЕ...

## "Халҡым!" тип һулҡылдап типте



**Рәшит Закир улы Шәкүр, замандаштарының бер өлөшөн "һуңғы туй"ына йыйҙы ла, уйлы-аңлыларға йәнә бер фәһем ҡалдырҙы: ил-йорт эшендә фиҙаҡәр булғанһың, янып йәшәгәнһең икән, халҡың һине йөрәк түрендә йәшәтәсәк!**

Әйе, халҡына йәнен-тәнен менән бирелгәнлек өлгөһө булды ағайыбыҙ. Ҡыҙғаныҫҡа, бындайҙар бииик һирәк. Әммә берәмһәрәм генә булһалар ҙа берәгәйҙәр һәм башҡорттоң нисек булыуын, ниндәй булырға тейешлеген һәр даим иҫкә төшөрәсәктәр, баҡыйлыҡҡа күскәс тә милләтте милләт итеп туплап тотоусы көс булып ҡаласаҡтар.

Ҡаҡса иңенә нисәмә йөк һалынғайны уның: төпсөрлә тел белгесе, абруйлы йәмәғәт эшмәкәре, тәжрибәле педагог, ойоштороусы... Һәм һәр йүнәлештәге эреле-ваҡлы проблемаларҙы хәл итеүҙә Хоҙай Тәғәлә бүләге - яҙыусылыҡ маһирлығына таянып, һүҙ көсөн урынлы, һүҙ ҡеүәһен яҡшы белеп файҙаланыусы белгес.

Унын 1998 йылда "Һоҡланғыс шәхестәр тормошо" серияһы тибындағы башланғыстай ҡабул ителгән "Арҙаҡлы башҡорттар" исемле йыйынтығы нәшерләнгәйне. "Баш һүҙ"ендә автор шуны һыҙыҡ өстөнә ала: "Илдең, милләттең рухи көсөн, ҡеүәтен, кешелек донъяһында тотҡан урынын иң элек уның бөйөк кешеләре, оло аҡыл эйәләре, илем, халҡым тип йәшәгән ҡаһарман рухлы заттары билдәләй. Ә халыҡ үҙенең данлыҡлы улдарын һәм ҡыҙҙарын белергә, улар менән ғорурланырға, һәр быуын улар өлгөһөндә тәрбиәләнеп, фәһем алып үҫергә тейеш..." Башҡорт хандан башлап, Салауат, Аҡмулла, Вәлидиҙәр аша Зекериә Аҡназаровтарға килеп еткән ғилми-биографик очерктар теҙмәһе уның үҙе һәм йәнә башҡалар менән тулыландырылырына шик юҡ.

Ул 1960 йылдарҙан уҡ милли уҙаңды үҫтереүселәрҙең иң алғы сафында барҙы. "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәген ойоштороуҙа туранан-тура ҡатнашып, 1989-1991 йылдарҙа уның тәүге рәйесе булыуы ла күпте һөйләй. Хыялында тиҫтәләрсә йыл бәпләгән "Башҡорт энциклопедияһы" идеяһын тормошҡа ашырыуы менән ул иң күренекле башҡорт зыялылары ҡатарына күтәрелде: "Башҡортостан: ҡыҫҡаса энциклопедия" тигән фундаменталь хеҙмәт 1996 йылда баҫылып сыҡты. 1998 йылда башҡорт топонимикаһы буйынса докторлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлауы Рәшит Шәкүрҙең фән өлкәһендә лә берҙәй егәрле һәм төплө эшләүен күрһәтә булыр.

*Төрлө жанрҙарҙа яҙылған (шиғыр, йыр, поэма, мәҡәлә, очерк, хикәйәт, дәреслек, һүҙлек һ.б.) өс тиҫтә самаһы китап авторы Рәшит Шәкүрҙең ҡайһы ғына йыйынтығын алып ҡарама, "халҡым" тиеп һулҡылдаусы ҡайнар йөрәк тибеше ишетелер. Бындай киҫерештәр арҡаһлы уҙамандың бигерәк тә "Быуаттар аманаты" (Өфө, 2002) тупланмаһының тәүге биттәрен асыу менән күңелдә билән алыр ҙа аҙаҡҡаса ебәрмәҫ. Ныҡышмалы эҙләнеүҙәр, төпсөрлә тикшеренеүҙәр, иғтибарлы күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһе булып тыуған мәҡәлә һәм очерктарҙа, юлъяҙма һәм сығыштарҙа 90-сы йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәте лә, тел һәм әҙәбиәт мәсьәләләре лә, ил хәтеренә иң изге ҡомартҡы булып уйылған рухи һәм матди хазиналарыбыҙға ҡағылышлы уйланыуҙар ҙа, тынғыһыҙ юламандың сәфәр киҫерештәре лә сағылыш тапҡан.*

Әйтергә кәрәк, осор тыуҙырған проблемаларҙы автор аналитик ҡарашлы ғалим күҙлегенән тикшерһә, һығымталары, дөйөмләштереүҙәре, уларҙы киң ҡатлам уҡыусыларына еткерә алыу рәүеше үткер ҡәләмле публицистыҡы, халҡының киләсәге өсөн хафаланған ил ағаһыныҡы. Мәҫәлән, ул былай ти: "Тәбиғәттең бысраныуы... күп ваҡыт рухи донъяның фәҡирләнеү эҙемтәһе... Эскән һыуҙарға, туйындырған тупраҡҡа, һулаған һауаға рәхимһеҙлек күрһәтелгән икән, ундай йәмғиәттә рухи тормошто, телде, мәҙәниәтте, бигерәк тә азыраҡ һанлы милләттәрҙе һәм уларҙың социаль үҫеш ихтыяждарын, туған телен һанға һуҡмау бер ҙә ғәжәп түгел" (15-се бит). "Академик Д.С. Лихачев ғилми публицистикаға "мәҙәниәт экологияһы" тигән төшөнсә индерә икән - уның ныҡлы ерлеге бар. Мәҙәниәт экологияһын тейешле кимәлгә күтәреү, әлбиттә, оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән программа нигеҙендә комплекслы хәл ителә торған ҡатмарлы проблема. Был йүнәлештә тәүге киҫектергеһеҙ эштәрҙең береһе - ентекле тикшеренеүҙәр зарурлығы. Ә бит "башҡорт халҡының тарихы, культура мираҫы, ...һирәк осрай торған тарихи ваҡиғалар, быуаттар дауамында алып барылған милли азатлыҡ хәрәкәте һ.б. менән айырылып тора. Беҙ бик боронғо, меңәрләгән йылдар төпкөлөнән килгән юғары мәҙәниәт мираҫын һаҡлаусы халыҡтарҙың береһе... Беҙ таш быуат дәүеренән башлап 15 мең йыл буйы бер-бер артлы балҡып торған әүәлге цивилизациялар илендә йәшәйбеҙ һәм үҙебеҙҙе нәҫел ептәренең һәм быуындар бәйләнешенең ниндәй генә тармағы менән булһа ла, тәүтормоштоң Шүлгәнташ һүрәттәрен тыуҙырған гениаль рәссамдарҙың, Урал арьяғы далаларында яңы табылған бөйөк Арҡайым ҡалаһығы мәҙәниәтенең, һармат сәнғәтенең варистары тип атарға хаҡлыбыҙ..." (32-се бит).

Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Һүҙ барған китапҡа ингән хеҙмәттәр бөгөнгөләрҙең ғәфләт йоҡоһона ҡаршы ярҙай ҡалҡыныуы менән ҡиммәт тә. Халыҡ үҙ тарихын мотлаҡ белергә тейеш тигән принциптан сығып эш итә автор. Ысынлап та! Белеү өсөн тәүге аҙымды эшләһәк, данлыҡлы үткәнебеҙ менән ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләһәк, милләтебеҙҙе бер ҡорға туплай алһаҡ, бөгөнгөбөҙҙө рухи сәләмәтлек яғынан үткәндәрҙән ҡайтыш итмәҫкә тырышасаҡбыҙ бит. Быныһы көн кеүек асыҡ. Был осраҡта ышаныслы аҙымдар менән киләсәккә юл ярағы ғына ҡала. Сөнки кешелек тарихы шуны күрһәтә: үткәндәрҙе дауам итеп кенә киләсәккә барып була.

Халҡыбыҙ яҙмышы хаҡында ҡайта-ҡайта уйланырға мәжбүр иткән был сығыштарҙы яңынан күҙҙән киҫерәм дә, улар уҙған быуат аҙағындағы башҡорт милли хәрәкәте тарихын өйрәнеүҙә етди сығанаҡ буласаҡ бит, тип ҡуям. Авторҙың шул ваҡиғалар уртаһында ҡайнауы, улай ғына ла түгел, шул ваҡиғаларға йүнәлеш биреүселәрҙең береһе булыуы был яҙмаларҙың баһаһын бермә-бер арттырып ебәрә.

Милләтте милләт булараҡ һаҡлауҙа телдең әһәмиәтен иҫбатлап тороу кәрәкмәй. Шулай булғас, "Быуаттар аманаты" аталмыш тышлыҡ эсендә телгә ҡағылышлы айырым бүлек булыуына ғәжәпләнер урын юҡ. Быуаттар аманаты - Рәшит Шәкүр өсөн сал тарих төпкөлөнән килгән яҙма телебеҙ һәм яҙма әҙәби телебеҙ, уның формалашыуы һәм үҫеүе, шул телдә һаҡланып ҡалған әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ, ғөмүмән, милли мәҙәниәтебеҙ мираҫы ул.

**(Дауамы 12-се биттә).**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



## ЙӨК АТЫ

Совхоздың Үҙәк бүлексәһендә бер ат булды. Йөк аты, былай-алайым, күрер күҙгә күрмәлекле йөк аты. Ауылда кешеләрҙең генә түгел, ҡош-ҡорттоң, мал-тыуарҙың йөрөп ятыуы, тереклек итеүе ус төбөндәгеләй асыҡ бит: ылдым тарткандарҙы, сығынсыламағандарҙы баҫымсаҡлайҙар. Был ат та өҙлөкһөҙ еккелә йөрөнө, күндәм генә ауыр арбаларҙы өҫтөрөнө, иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә баш баҫып көтөү көттө, бесән осоронда косилканың мисәүендә түгел, иң төбөндә көсәндә, унан ҡалһа, тырмаға баҫтырҙылар, өй беренсә тиерлек йөрөтөп күбә тарттырҙылар.

Йәшәйеш ҡанундары шундай - ерҙәге әйбер, тереклек мәңгелек түгел, бер килеп ваҡыт үтеү менән туҙа, ҡартая. Күрмәлекле ат ваҡыт үтеү менән баҡтаһы елдә туҙыраған, нур ҡайтҡан күҙҙәренән субырҙап йәштәре аҡҡан, ҡабырға һөйәктәре ҡырғыстай беленгән ҡараҫҡыға әүерелде. Көс-ҡарыуы ҡайтҡас, элекке хеҙмәттәрен иҫәпкә алыптыр инде, уның нимәнеңдер кимерәһен дә мөнйөйөн тағы тип, ҡамытын һалдырып, дағаларын ҡуптарып алып, ирекккә ебәрҙеләр. Шул хәлдә лә үҙен кәрәклегә иҫәпләп, башҡа аттарҙан, өйөрҙән тотам да ҡалмай эт һымаҡ эйәреп йөрөнө алаша. Өйөр башлығы айғыр ҙа уны ҡабул итте, ситкә тибәрмәне. Көнө буйы шулай йөрөй, сарсаһа, шишмәнән һыу эсә, асыҡһа, ҡырҙағы, баһыу буйында үҫкән ҡарағуранын ашай, мәгәр артыҡ тамаҡ булғыһы килмәгәндер, күрәһең, трактор тәгәрмәсенән әтмәләнгән һауытҡа ҡойолған һолоға һис ҡасан ҡағылманы.

...Бер танышым пенсияға сыҡты. Ул да иртәнән алып киҫкә ҡәҙәр фәҡәт хеҙмәт тип янған кеше ине. Телендә лә, уйында ла нимәнелер матур итеп, сифатлы итеп ваҡытында атҡарыу йә башҡарыу. Һаман да ул үҙен кәрәкле кеше итеп иҫәпләй, йәнәһе лә, унһыҙ донъя шыпа ла алға бармай, емерелә, юҡҡа сыға. Иртән эш башланғас та берәй йомош табып сығып китә, төшкө аш та башҡаларҙыҡылай бер сәғәт, кис етте иһә эшем эйәһеләй арып-талып ҡайтып инә.

Бер көн ул минә шылтырата:

- Эш тип йөрөп гәзит-мәҙар уҡығаным, телевизор ҡарағаным юҡ. Тиҙҙән байрам көндәре бит, нисә көн ял итәбеҙ ул?

...Теге, аттарҙың артынан эйәреп йөрөгән элекке йөк аты, күҙ алдыма килеп баҫты.

## ҠАБЫРҒА

Өсәүләп ултырабыҙ. Эргәмдәге икәү генә үҙ-ара һөйләшәләр, ә мин бары һауа һуларға тип сыҡҡанмын, тегеләрҙең әңгәмәһенә ҡыҫылмайым да, ҡушылмайым да. Сәстәре сыбыҡланған, бит-йөҙөн шырт һаҡал-мыйыҡ япҡан, өҫ-башы әрпеш ир эргәбеҙҙән үткәнһүткән ҡатын-ҡыҙҙы яратмай ямандай:

- Ҡара әле анау бисәне, ҡайһылайтып килешһеҙ итеп кейенеп алған булған, ә тегене күр, лыс буяҡ, сибәрмен, тип китеп баралыр инде. Анауһысы...

Өлкән йәштәгеһе шуҡ йылмайҙы:

- Ҡатын-ҡыҙҙы Аллаһы Тәғәлә ир кешенең ҡабырғаһынан яралтҡан, тигәнде ишеткәнең бармы?

- Бар. Шунан?

Һынамсыл ҡараш елдә елберҙәргә әҙер йоҡа кәүҙәне баштан-аяҡ үткәрҙе:

- Шунан, тип ни, сифатһыҙ ҡабырғанан яҡшы ҡатын-ҡыҙ әүәләп булмайҙыр ул. Шуны ғына әйтмәксе инем...

ИНТЕРНЕТТАН



# ТОРЛАҠТЫ ЙЫШ АЛЫШТЫРЫУ...

## сәләмәтлекте ҡаҡшата

■ Һуңғы ваҡытта сәстәрҙе таҙартыуҙың яңы ысулы - co-washing ҙур популярлыҡ яулай бара. Был осраҡта сәстәрҙе шампунь менән түгел, ә кондиционер менән йыуырға кәрәк. Косметологтар белдереүенсә, бары тик кондиционерҙы ғына йәлләргә ярамай. Ул күбекләнеп торһон тиһәгеҙ, бер аҙ һыу ҡушырға була. Иң мөһиме, кондиционер составында силикон булмаһын. Был ысул көсһеҙ һәм ҡоро сәстәрҙең торошон яҡшырта, уларҙы тарауы еңеләйә. Уның тәьҫирен яҡшыртыу өсөн кондиционерға зәйтүн майы, бал, бер-ике тамсы сәй ағасы майы йәки бөтнәк өҫтәргә була.

■ Миҙгелдәр алышынған мәлдә мунсаға йөрөгөҙ, тип кәңәш итә табиптар. Мунса был ваҡытта көстәрҙе тулыландырыу өсөн иң яҡшы сара булып тора. Миндек тиреләге, мускулдарҙағы, тире аҫтындағы күҙәнәктәрҙә ҡан әйләнешен яҡшыртып ҡына ҡалмай, тын юлдарына ла ыңғай йоғонто яһай, бынан тыш, матдәләр алышыныуы тиҙләнә. Миндектән тыш, белгестәр бесән вағы быуының да файҙалы булыуын белдерә. Бесән еҫе һәм ҡайнар быу бактерицид тәьҫиргә эйә, ул һауалағы һәм тиреләге бактерияларҙы шунда уҡ юҡҡа сығара. Мунсалағы ҡайнар быу һеҙөмтәһендә кеше йышыраҡ һәм тәрәнерәк тын ала башлай, тимәк, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнекмә яһала.

■ Асығыуҙың синтетик аналогы грелин яман шеш менән сирләүсе ауырыуҙарҙа йышыраҡ осраған аппетит булмауы проблемаһын хәл итә аласаҡ. Грелин эсәктәрҙә барлыҡҡа килә һәм асығыу тойғоһо өсөн яуап бирә. Японияның Осаки университеты ғалимдары был гормондың эшмәкәрлек механизмын тикшереү һөҙөмтәләре артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларға ярҙам итер тигән маҡсатта үткәрә. Әммә әлегә уларҙың хеҙмәте уңышҡа өлгәшмәгән, шулай ҙа был гормон химиотерапия үткәреүселәрҙең тормошон еңеләйтеү мөмкинлеге бирәсәге асыҡлана.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла көүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртәнге мәл - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Профессор Даниэль Якубович әйтеүенсә, иртән мотлаҡ шоколад ашаһаң, көнө буйы татлы ризыҡтар ашағыһыҙ килмәйәсәк.

■ Ата-әсәләре менән бер туҡтауһыҙ торлаҡ алыштырып йөрөргә мәжбүр булған балалар йышыраҡ ауырый, ти белгестәр. Быңдай һығымта Шотландияла үткәрелгән тикшеренеүҙәр ярҙамында яһалған, унда 15, 35 һәм 55 йәштәге 850 кеше ҡатнашҡан. 20 йыл буйына уларҙың барыһының да йәшәү рәүеше, сәләмәтлеге, ғәҙәттәре күҙәтеп барылған. Тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бишәүһе йәшәү урынын бер тапҡыр ҙа алыштырмаған, 59 проценты бер йәки ике тапҡыр алыштырған, 21 проценты гел күсенеп йөрөгән. Кем үгәй атай менән йәшәгән, улар араһында күсенеүселәр йышыраҡ булған. Ике йәки өс бала тәрбиәләүселәр ҙә йәшәү урынын күберәк алыштырған. Дөйөм алғанда, кемдәрҙең бала сағы бер урында ғына үтмәгән, уларҙың һаулығы менән дә проблемалар йышыраҡ осраған, улар тиҫтерҙәренә ҡарағанда көсһөҙөрәк булған, йышыраҡ психологик стресс кисергән, эскән һәм тәмәке тартҡан.

ХӘТЕРЛӘП...

# ШӘКҮР ЙӨРӘГЕ...

## "Халҡым!" тип һулҡылдап типте

(Башы 11-се биттә).

Төпсөрлө ғалим күҙлегенән Рәшит Шәкүр тел мәсьәләләрен тарихи күҙлектән баһалай, бер үк мәлдә бөгөнгөнө лә иғтибарҙан ысҡындырмай. Шуға ла уның был осраҡта ла теория менән көндәлек мәшәҡәттәрҙе бәйләргә ынтылыуы яҡшы аңлашыла. "Ғилми-ғәмәли конференциялар, - ти ул, - мәсәлән, бер яҡтан, ғилми кәңәшмә функцияһын үтәһә, икенсе яҡтан, фәнде тормошҡа, практикаға бәйләү, эш тәжрибәһен, алдынғы эш алымдарын дөйөмләштереп, шуны киң рәүештә таратыу маҡсатын" (214-се бит) күҙ уңында тота. Фән фактарҙы ғына танығанлығын, фактарға ғына нигеҙләнеүен Рәшит Шәкүр ышандырырлыҡ, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән иҫбатлай. Бәхәсле мәсьәлә икән, "Туҡтағыҙ әле, ә фактар ни һөйләй һуң?" тигәндәй, тарихҡа, проблемаға ҡағылышлы күренештәрҙең тарихи үҫеш-үҙгәрешенә, бөгөнгө хәленә мөрәжәғәт итә.

Әйтәйек, "Башҡорт теленең диалекттар системаһы һәм уны классификациялау мәсьәләһе" мәҡәләһен алайыҡ. Бында ул, фән тармағы буларак, башҡорт диалектологияһының үҫеш тарихын барлай, ҡаҙаныштар менән ғорурлана, башҡорт телселәренең оҙаҡ йылдар буйы өс диалект араһында аҙашып йөрөүенә әсенә, киләсәктә хәл ителергә тейешле мөһим проблемалар һәм бурыстар булыуын билдәләй. Автор диалектология мәсьәләләрен башҡорт халҡы тарихы менән тығыҙ берлектә ҡарағанлыҡтан, уның үҫеш этаптарын дөрөҫ тотоп ала, субъектив сәбәптәр арҡаһында алдынғы концепцияларҙың һаңға һуғылмауын күрһәтә. "1950 йылдарҙа, - ти ул, - Т.Г. Байышевтың башҡорт теленең ике генә түгел, ә өс территориаль диалекттан торғанлығын ғилми яҡтан нигеҙләп яҙған хеҙмәтен абруйлы ғалимдарыбыҙ хуплап ҡаршы алырға баҙнат итмәне, уның, ошо концепцияға таянып, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш регионында, Татарстандағы элекке Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәренә ҡараған райондарҙа ошо өсөнсө диалектта һөйләшеүсе башҡорттарҙың балаларын башҡорт телендә уҡытыу талабын күтәреп сығыуын, ерле халыҡҡа ҡарата үткәрелгән аҫтыртын сәйәсәт арҡаһында, республикаһың ул саҡтағы етәкселеге бойомға ашырырға ашыҡманы. Шул сәбәпле, башҡорт диалекттарын өйрәнеүҙең тәүге осоронда урынлашҡан хата ҡараш... урап үтә торған темаға әйләнде" (218-се бит).

Рәшит Шәкүр, тыуған еребеҙгә бәйле, "һәр кемгә үҙенең бесән сапҡан, еләк йыйған ерҙәре, ата-бабалар ғүмер һөргән тупраҡ күҙ ҡараһы кеүек ҡәҙерле" тип, һыҙыҡ өҫтөнә ала. Телгә ҡарата ла ул үҙендә шундай уҡ изге тойғолар йөрөтә, тиер инем. Шуға ла уның теге йәки был атамаларҙы изгеләштереп ҡарауы бик тәбиғи. Уның ер-һыуыбыҙҙың, тау-яландарыбыҙҙың һәр бер исеменә шул тиклем дә иғтибарлы, шул тиклем дә ихтирамлы, тәрән һөйөү менән ҡарауына иҫ-аҡылың китер. "Быуаттар аманаты" (Өфө, 2002) йыйынтығында автор үҙе былай ти: "Урал, Ирәмәл, Ағиҙел, Яйыҡ, Әй, Йүрүҙән, Дим, Ашҡаҙар, Һаҡмар, Төйәләҫ һымаҡ исемдәргә, әйтерһең дә, беҙҙең рухыбыҙ һеңешкән, әйтерһең, беҙҙең уй-тойғоларыбыҙға ҡанат ҡуя улар. Беҙҙе бер бөтөн итеп йыйып, туплап тора түгелме һуң ошо изге төйәгебеҙ һәм уның аҫыл таштай күркәм исемдәре" (309 бит). Автор тел нескәлектәрен һаҡлаусы һөйләштәргә, һөйләшсәләргә шул тиклем иғтибарлы - хайран итерһең! Ундағы күҙәтеүсәнлек, телгә һиҙгерлек - иҫ китмәле. Тарихи этнография өлкәһендә киң мәғлүмәтле булыуы ла һәр саҡ ярҙамға килә. Шуға ла һығымталары ышандырырлыҡ, дөйөмләштереүҙәре дәлилле. "Башҡорт сит телдән ингән һүҙҙәрҙе лә, үҙ теленең тирмән ташы аша үткәреп, шымартып сығарған" тиеүе лә, мәсәлән, күп миҫалдар менән нығытыла.

***Башҡорт илендә күренекле шәхес булып танылыуына ҡарамаҫтан, ул ғәжәйеп баҫалҡы, сабыр, аралашыуҙа ихлас ябайлығы менән кешеләрҙе арбаны. Бер үк мәлдә, ниндәй генә мәсьәләгә ҡағылма (айырыуса милләт яҙмышына бәйләнгәне), Рәшит Шәкүр аҙағынаса принципиаллек күрһәтер ине, бер кем алдында ла баҙап ҡалмай торғайны. Был - милләтебеҙҙең рухи ҡиммәттәренән кәс алғанға, шул ҡиммәттәр кимәлендә ҡалырға ынтылғанға, уларҙы һаҡларға һәм заманға ярашлы ҡулланып, артабан байытырға тырышҡанға шулай. Быңдай шәхестәр, берҙән, башҡорттоң ниндәй булыу мөмкинлегенә бәйле өлгө (эталон!) хеҙмәтен үтәһә, икенсенән, ундайҙарға мөнәсәбәт (хөкүмәттең, йәмғиәттең, милләттең) дөйөм рухи кимәлебеҙҙе билдәләүсе үлсәм дә ул.***

Фәнни хеҙмәттәрендә ғалим тәү сиратта, абруйлы топонимист ролендә сығыш яһай торғайны. Әйткәндәй, уның был темаға бағышланған тәүге китабының исеменә үк тәрән мәғәнә һалынған: "Ерҙең хәтер китабы" (Өфө, 1984). Топонимияның төп үҙенсәлектәренең береһе шунда: ул күп фән тармаҡтары менән тығыҙ үрелештә йәшәй (ғөмүмән, ҡайһылыр бер айырым ғилми йүнәлештең эргә-тирәһен күҙаллай алмау, уның башҡалар солғанышындағы урынын белмәү тәбиғи рәүештә сикләнгәнлеккә килтерә). Топономистҡа билдәле дәрәжәлә телсе лә (һөйләш айырмалыҡтарын яҡшы белгән диалектолог та), фольклорсы ла, тарихсы ла (уның эсендәге тармаҡтарҙы, тәү сиратта этнографияны күҙаллау), географ та (тарихи географиянан, картографиянан мәғлүмәтлелек) булырға кәрәк. Геология, биология фәндәренән хәбәрҙар булыу ҙа эшкә ярҙам итә. Бөтә хикмәт шунда ла: исемдәрҙә ул халыҡтың тарихын юллай; йылға, тау, күл, урман һ.б. атамаларҙа ата-бабалар рухының бөйөклөгөн күрә, шул бөйөклөктө һаҡлау-яҡлау өсөн ярҙай күтәрелә. Шуға ла авторҙың фекерҙәрҙе дәлилләү, нигеҙләү, нығытыу өсөн әленән-әле тарихи ваҡиғаларға, фольклор әҫәрҙәренә күҙәтеүгә, теге йәки был төбәк башҡорттарының үткәне һәм бөгөнгөһөнә бәйле аналитик тикшеренеүҙәргә төшөп китеүе ғәжәп түгел. Был хеҙмәт фундаменталлеге менән хәтерҙә ҡала, күңелгә уйыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Арҙаҡлы башҡорттө һуңғы юлға оҙатҡанда, уның менән аралашҡан саҡтарҙы хәтерләнем, йылы сағында уҡ таныша барған хеҙмәттәрен ҡайтанан күңелемдә барланым да, халҡыбыҙҙың бөгөнгө хәлен уйланым...**

**Төңөләрҙәй сөңгәлдәргә юлыҡҡан осраҡтар булмай түгел. Быңдай мәлдәремдә мин үҙемде шулай йыуатам: осорҙаштарыбыҙҙың күпселеге яҡындан аралашып белгән Рәшит ағай Шәкүр, Әхмәт ағай Сөләймәнов, Нияз ағай Мәжитов кеүек ил ағалары быҙҙың рухы ҡаныбыҙҙа ҡайнағанда, йәшәйәсәк әле башҡорт! Ҡуҙҙар тере әле көл аҫтында. Яңып бөтмәгән әле тарих усағында милләтебеҙҙең ташкүмергә әйләнгән ҡеүәтле тамырҙары. Тамсы ҡандан терелерҙәй потенциаль мөмкинлектәребеҙ ҙә, Хоҙайға шөкөр, етерлек...**

**Фәнил КҮЗБӘКОВ**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

ФӘҺЕМ

# БӘХЕТ ҠАНУНДАРЫ



Бәхетле булыу - һыу төмәнә ләззәтләнеү, биттәреңдә елдәр иркәләүен, еүеш ер төмен тойоу ул. Был, тимәк, бәләкәй генәнән ҙур тойғолар ташҡынына сумыу, әллә ниндәй сәбәптәр булмаһа ла йылмая, үҙеңдең ахмаҡлыҡтарыңдан көлә белеү ул.

Бәхет - ул үҙең яратҡан кешеләрҙе төңөлдөрмәү. Ул күҙ йәштәрен дә, шатлыҡтарыңды ла дуҫтарың менән бүлешеү. Ул көндөң дуҫы һәм төндөң һөйәркәһе булыу. Ул тормош спектакле өсөн Хоҙайға рәхмәтле булыу.

Кем яҡшы тормошҡа лайыҡ? Иң бай эшҡыуарҙармы? Иң көслө сәйәсмәндәрме? Иң сағыу интеллектуалдармы?

Юҡ! Кем үҙ йәне кимәлендәге тормош сифаты юғарылығына өлгәшә - шул бәхетле. Кем үҙен ҡурҡыуҙар төрмәһенән ҡотҡара - шул бәхетле. Кем борсолоуҙарынан ҡотола, кем насар кәйефен еңә һәм кем үҙ имгәнеүҙәрен иҫкәртә - шул бәхетле. Кем хис-тойғолар диңгеҙендә һиллекҡә өлгәшә - шул бәхетле. Һеҙ ошо диңгеҙҙә йөҙөп сыға алырһығыҙмы, әллә диңгеҙ төбөнә китерһегеҙме? Барыһы ла үҙегеҙҙең ҡулда!

**Аугусто КЮРИ.**

✓ *Шатлыҡта ла ярҙам кәрәк бит ул: күңелең менән бәхетеңде тәрән төшөнөү, тойоу һәм бүлешеү өсөн ярҙам. Бүлешмәгән бәхет - бәхет түгел. Кеше бәхетте бер үҙе генә кисерһә, ул уны боҙа.*



*БАҠСА*

# ЙӘЙ УРТАҺЫНДА СӘСЕП...



**Бына июль айы ла үтеп бара, баҡсаларҙа яҙҙан ултыртҡан йәшелсә-емеш уңыш бирә лә башланы. Әммә был айҙа ла ҡайһы бер нәмәләрҙе сәсеп үҫтереп өлгөрөргә була. Был турала тулыраҡ мәғлүмәт - мәҡәләлә.**

Тәү сиратта был, әлбиттә, укроп. Ул әрһеҙ, шуға ла баҡса миҙгеле бөткәнсе, ҡасан сәсһәң дә, тиҙ генә үҫеп китә. Шулай ҙа һуң сәскәндә тиҙерәк күтәрелеп китһен өсөн орлоған 3 көн йылы һыуҙа тоторға. Һыуҙы көн һайын алмаштырып торорға кәрәк.

Кресс-салат һәм салаттың башҡа төрҙәре лә йәй уртаһында сәсһәң дә уңыш биреп өлгәрә. Уларҙың тупрағы дымлы булыуын гел тикшереп торорға кәрәк, шул саҡта салат һутлы һәм тәмле була. Үҫентеләрҙе йәлләмәй һирәкләтеп тороу ҙа мөһим. Бөгөн модала булған йәшеллек - рукколаны ла июлдә сәсергә була. Шытымы бер аҙнанан күренә, ә ике аҙна үткәс, әҙәп ашай башларға ла мөмкин. Ә бына шпинат өс аҙнанан өлгөрә.

Июлдә шулай уҡ борсаҡты ебетеп сәсергә мөмкин. Йәй уртаһында яҡшы үҫкән тағы бер ҡуҙаҡлы - ул ҡуҙаҡлы фасоль. Әйткәндәй, фасолде теплицаға ҡыяр һәм помидорҙар эргәһенә сәскән осраҡта, ул бик оҙаҡ, хатта ҡыяр һәм помидор бөткәс тә уңыш бирә.

Июлдә түтәлгә ултыртылған тамыраҙыҡтар йыйып алыу мәле етеүгә яҡшы өлгөрәсәк. Мәҫәлән, әле редис сәсергә була. Уны күләгәлерәк ергә сәсергә кәрәк, тәмле була. Редисҡаға тиҙәк, ҡош тиҙеге төнөтмәһе кеүек органик ашламалар кәрәкмәй, ә бына калий бик "оҡшай". Шулай уҡ дайкон - редистың бер төрө лә ошо осорҙа сәскәндә миҙгел тамамланыуға өлгөрә. Ул ғына ла түгел, был тамыраҙыҡ киләһе яҙға тиклем тәмен дә юғалтмаясаҡ. Быларҙан тыш, сөгөлдөрҙө лә йәй уртаһында сәсергә була, сөнки ул һауа температураһы 25 градустан юғары булғанда ла яҡшы үҫә. Сөгөлдөр тиҙәк һәм серетмәне үҙһенмәй, уны алдан кишер һәм картуф үҫкән тупраҡҡа ултыртырға ярамай. Ә бына торма һәм шалҡан 45-60 тәүлектә үҫеп етә, шуға уны ла июлдә ултыртып өлгөрөү яҡшыраҡ.

Йәшелсәләрҙән июлдә сәскән кәбеҫтә лә өлгөрөргә мөмкин. Кәбеҫтәнең иртә өлгөрә торған сорттарын, кольраби, брокколи, пекин кәбеҫтәләрен сәсергә була. Уны ҡояш бик төшмәгән урынға сәсеү яҡшы, был кәбеҫтәне сәскә атыуҙан һаҡлай.

*ШУНДАЙ КӘҢӘШ*

# НАСАР ҒӘҘӘТЕҢ БУЛҺА...

**Республика табиптары насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоуҙың биш ысулын атаны. Зыянлы ғәҙәттәрҙән ҡотолоу бик ауыр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙан ҡотолоу һәм сәләмәт тормош алып барыу юлдары бар, тип һыҙыҡ өҫтөнә алдылар Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.**



**Был ғәҙәттең насар булыуын аңлау һәм уны контролдә тотоу.** Беренсе аҙым - проблеманы аңлау. Бының өсөн зарарлы ғәҙәт тураһында мәғлүмәтте анализларға һәм визуаллаштерергә кәрәк. Был зыян тураһында белемде арттырырға һәм ғәҙәтте контролдә тоторға ярҙам итә. Бер көн, бер аҙна, бер ай эсендә күпме тәмәке тартырға мөмкин икән, тип уйлайһығыҙмы? Бының өсөн күпме аҡса сарыф итәһегеҙ?

**Зыянлы ғәҙәтте файҙалы ғәҙәт менән алмаштырыу.** Әгәр файҙалы ғәҙәт менән алмаштырһаң, зыянлынан ҡотолоу еңелерәк. Мәҫәлән, тәмәке тартыуҙы ташлау менән кисен йүгерә башларға мөмкин. Йүгереү мейегә сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуығыҙ тураһында хәбәр ебәрә, тимәк, тәмәке тартырға ярамай. Шулай уҡ саф һауала йөрөргә, һағыҙ сәйнәргә була.

**Ғәҙәти тормошҡа яңы ғәмәлдәр өҫтәү.** Яңы нәмәгә ғәҙәтләнеү еңел түгел. Яңы ғәмәлдәр өҫтәп, уны еңеләйтергә була. Мәҫәлән, иртәнсәк кофе эсә башларға, тынлыҡта ултырып эсергә һәм бер нисә минут медитация үткәрергә мөмкин.

**Тирә-яҡ мөхитте үҙгәртеү.** Тирә-яҡ мөхит тә ғәҙәттәрҙе билдәләй. Тәртипте үҙгәртеү өсөн эргә-тирәләге һеҙҙе ҡоторҡтҡан нәмәләрҙе бөтөрөргә кәрәк.

"Зыянлы ризыҡтарҙан баш тартырға теләһәгеҙ, өҫтәлдән кәнфит, чипсы һәм печеньеларҙы алып, улар урынына емеш-еләк һалынған ваза ҡуйығыҙ, - тип кәңәш итә белгестәр. - Шулай уҡ күренгән урынға - эш өҫтәленә, компьютерға йәки көҙгөгә - һеҙҙе дәртләндергән һүҙҙәр яҙылған яҙмалар йәки маҡсаттар исемлеген элеү файҙалы буласаҡ".

**Ярҙам һорарға һәм яуаплылыҡ өҫтөндә эшләргә.** Сәләмәт тормош башлағанда эргә-тирәләгеләрҙең ярҙамы бик мөһим. Яңы маҡсатығыҙ тураһында яҡындарығыҙға әйтегеҙ. Улар, бәлки, һеҙҙе хуплап ҡына ҡалмаҫ, ә һеҙҙең менән иртәнсәк йүгерә башлар. Был файҙалы ғәҙәтҡә әйә булыу өсөн этәргес буласаҡ: һеҙ үҙегеҙгә генә түгел, ә яҡынығыҙға ла яуаплы булырһығыҙ.

*ХӘҮЕФ-ХӘТӘР*

# ЮЛДА - ҠОРАЛАЙ!



**Йыл башынан Башҡортостанда ҡырағай йәнлектәр ҡатнашлығында 50 юл фажиғәһе теркәлгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Экология министрлығында.**

Йышыраҡ ҡоралайҙар һәм мышылар, һирәгерәк ҡабандар тәгәрмәс аҫтында ҡала, тип белдерҙеләр министрлыҡта һәм водителдәргә юлда, айырыуса эңер ваҡытында һәм төндә иғтибарлыраҡ булырға кәңәш бирҙеләр. Хайуандарҙың үҙҙәрен нисек тоторонн белеп булмай. Шуға күрә водителдәргә тиҙлекте кәметеү һәм ваҡытында туҡтап өлгөрөү өсөн хәүефһеҙ тиҙлек режимын теүәл үтәргә кәрәк. "Ҡырағай йәнлектәр" тигән юл билдәләре ҡуйылған урындарҙа айырыуса иғтибарлы булыу талап ителә.

Хәбәр ителеүенсә, ҡырағай хайуандар ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаһын Башҡортостандың ЮХХДИ һәм Экология министрлығы хеҙмәткәрҙәре теркәргә тейеш. ОСАГО страховка полисы бар икән, килтерелгән зыянды ҡаплауҙан ҡотолорға мөмкин. Был осраҡта страховка компанияһы түләй. Юл-транспорт ваҡиғаһына тарыһағыҙ, бәрҙерелгән йәнлек янына яҡын барырға, шулай уҡ юл фажиғәһе урынын ташлап китергә ярамай. Бының өсөн водителде 1,5 йылға тиклем автомобиль менән идара итеү хоҡуғынан мәхрүм итеүҙәре йәки 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алыуҙары ихтимал. Ҡыр йәнлектәре менән юл фажиғәһенә осраһағыҙ, 112 йәки 8 (347) 218-04-30 телефондарына шылтыратығыҙ.

# ВЕЙП ҺӘМ ТӘМӘКЕ



**"Республика клиник психиатрия дауаханаһына киҫкен психик хәлдәге ир килтерелгән. Уның юҡ-бар һөйләгәненән табиптар уның галлюцинация кисергәнен билдәләй", - тип белдерҙе республиканың Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин.**

Лаборатория тикшереүҙәре һеҙөмтәһендә пациентта никотин матдәләрҙең юғары миҡдары табыла. Әңгәмә барышында психиатр уның йыш ҡына вейп менән тәмәкене сиратлап тартыуын асыҡлай. "Электрон тәмәке аша организмға хәүефле матдә күпләп эләгә. Шуларҙың береһе - акролеин, ул бик ағыулы матдәләргә ҡарай. Вейп мейе үҫешен тотҡарлай, хәтергә, концентрацияға, үҙ-үҙеңде контролдә тотоуға һәм нервы системаһына, иммунитетҡа насар йоғонто яһай, үпкә һәм йөрәк туҡымаларына зыян килтерә", - тине Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығы башлығы.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

***Икенсе хат***

## Йәшлек - бөтә ғүмер

Мәктәптә, аҙаҡ университетта уҡығанда "оло тормошом" бөтөнләй икенсе шарттарҙа, ниндәйҙер бүтән донъяла булыр, мине бөтөнләй башҡа кешеләр уратып алыр кеүек тойола ине. Хәҙерге ваҡытта булғандан бер нәмә лә ҡалмаҫ...

Ысынында, барыһы ла бөтөнләй башҡаса булып сыҡты. Тиҫтерҙәрем минең менән ҡалды. Барыһы ла түгел, әлбиттә: күптәрен үлем алып китте. Шулай ҙа йәшлек дуҫтары иң тоғролары, даими булып сыҡты. Таныштар ғәжәйеп күбәйҙе, әммә ысын дуҫтар - күптәнгеләре.

Ысын дуҫтар йәш саҡта табыла. Хәтеремдә, әсәйемдең дә гимназияла бергә уҡыған ахирәттәре генә ысын дуҫтары булып ҡалғайны. Атайымдың институтта бергә уҡыған иптәштәре дуҫ ине. Күпме күҙәтәм, өлкәнәйә бара ихлас дуҫлашыу теләге кәмей бара.

Йәшлек - ул яҡынайыу осоро. Һәм был турала хәтерҙә тоторға, дуҫтарҙы һаҡларға кәрәк, сөнки ысын дуҫлыҡ ҡайғылы һәм шатлыҡлы саҡтарҙа бик ярҙам итә. Шатлыҡта ла ярҙам кәрәк бит ул: күңелең менән бәхетеңде тәрән төшөнөү, тойоу һәм бүлешеү өсөн ярҙам. Бүлешмәгән бәхет - бәхет түгел. Кеше бәхетте бер үҙе генә кисерһә, ул уны боҙа. Ҡайғы-хәсрәт, юғалтыуҙар осоро килһә, тағы ла яңғыҙ булырға ярамай. Кеше яңғыҙ булһа, бөттө баш.

Шуға тәрән ҡартлыҡҡа тиклем йәшлегегеҙҙе ҡурсалағыҙ. Йәш саҡта тупланған барлыҡ яҡшы нәмәне ҡәҙерләгеҙ, йәшлек байлығын әрәмшәрәм итмәгеҙ. Йәш саҡта әйә булған бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. Йәш саҡта тәрбиәләнгән ғәҙәттәр ғүмерлеккә ҡала. Хеҙмәттәге оҫталыҡ та шулай. Эшкә өйрәндең икән, ул һәр ваҡыт һинә шатлыҡ килтерәсәк. Ә был кеше бәхете өсөн нисек мөһим! Ғүмер буйы ялҡау, хеҙмәттән, көс түгеүҙән ҡасып йәшәгән кешенән дә бәхетһеҙерәк әҙәм юҡ...

Йәш саҡта нисек булһа, ҡартлыҡта ла шулай. Йәшлектә алған яҡшы оҫталыҡтар тормошто еңеләйтер, ямандары уны ҡатмарландырыр һәм ауырлаштырыр.

Һәм тағы. Шундай урыҫ мәҡәле бар: "Намыҫты йәштән һаҡла". Йәш саҡта ҡылған барлыҡ ҡылыҡтар хәтерҙә ҡала. Яҡшылары ҡыуандырасаҡ, ә аламалары йоҡларға бирмәҫ!

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 20 ИЮЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ШАХМАТ КӨНӨ



**Был байрам 1966 йылдан алып 20 июль көнө билдәләнә. Һәм юҡҡа ғына ошо көн һайланмаған: 1924 йылда Парижда Һигеҙенсе олимпия йәйге уйындары үткән көндә Халыҡ-ара шахмат федерацияһы булдырыла. ФИДЕ - халыҡ-ара хөкүмәттеке булмаған спорт ойошмаһы, ул төрлө илдәрҙең милли шахмат ассоциацияларын берләштерә һәм бөгөн 201 милли федерация уның ағзалары булып тора.**

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ла спорт, сәнғәт һәм физик әүҙемлек ҡараштарҙы һәм тәртипте үҙгәртә, хөрәфәттәрҙе енә, шулай уҡ кешеләрҙе ҡанатландыра, раса һәм сәйәси ҡаршылыҡтарҙы емерә, хоҡуҡтарҙы ҡыҫыуға ҡаршы сығыуын һәм бәхәстәрҙе һүрелдерә алыуын танып, 2019 йылда Генераль Ассамблея ултырышында шулай уҡ 20 июлде Бөтә донъя шахмат көнө тип иғлан итә.

Шахмат, йәки сатраш - үҙендә спорт, ғилми фекерләү һәм сәнғәт элементтарын берләштергән иң боронғо мәҙәни уйындарҙың береһе. Ул ғәҙеллектә, бер-береңә ихтирамлы ҡарашты хуплай. Әйткәндәй, "шахмат" тигән һүҙ шаһ үлде, тигәнде аңлата. Уйын Һиндостанда барлыҡҡа килгән: 5-се быуатта унда шахматтан алдараҡ чатуранга уйыны килеп сыҡҡан. "Чатуранга" атамаһы "дүрт өлөшлө" тигәнде аңлата, элек уны дүрт кеше ултырып уйнаған икән. Чатранг, аҙағыраҡ Шатрань тигән исем бирелгән уйын Сәсәниҙәр Фарсы дәүләтенә 600 йыл тирәһендә килә. Артабан Ебәк юлы буйлап тарала. 1000 йылда шахмат уйыны Европала ла, Бөйөк Даланан беҙҙең илгә килеп тә дан яулай.

Заманса шахмат уйындары буйынса тәүге халыҡ-ара ярыш 1851 йылда Лондонда үтә. Донъяның 100-ҙән ашыу илдәрендә шахмат рәсми рәүештә ҡабул ителгән уйын. Рәсәйҙең һәр ҡалаһында шахмат федерациялары бар, тиерлек. Башҡортостанда был ойошма 2005 йылда булдырыла һәм 2015 йылда Рәсәй Спорт министрлығында рәсми теркәлеү үтә. Ошо йылдан алып уны Ишбулатов Филүс Хәмит улы етәкләй.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Балыҡ. Янғужин. Набат. Аванс. Арҡан. Клаксон. Ауыртыу. Табут. Даруға. Аҫаба. Яра. Алама. Тояҡ. Изба. Лимит. Агния. Ваба. Аш. Наҙан. Евдоким. Витамин.

**Вертикаль буйынса:** Аҡсарлаҡ. Айыутабан. Терапия. Ялан. Кузеев. Скудо. Боған. Ябаға. Шитова. Бикбулатов. Алиби. Ҡанат. Мин. Ант. Аҡлан. Аҡыл. Урам. Нут. Алтын.

ХУЖАБИКӘГӘ

# ҠАРБУЗДАН ҠАЙНАТМА



**Ҡарбузды ҡауынға ҡарағанда йышыраҡ консервалайҙар. Әҙерләмәләр араһында татлыларын да, тоҙлоларын да табырға була. Шулай ҙа татлы рецептарға өҫтөнлөк биреләләр, моғайын.**

## Ҡайнатма

Ҡарбуз ҡабығынан гәрәбәләй һары ҡайнатма әҙерләү өсөн 1 кг ҡабыҡ, 1 кг шәкәр, 1 лимон кәрәк була. Ҡарбуз ҡабығының ҡара йәшел ҡаты тышын әрсергә, аҡһыл-йәшел өлөшөн 2 сантиметр тирәһе киҫәктәргә бүлеп сығырға. Ҡабыҡта ҡарбуздың ҡыҙыл йомшағын бер аҙ ҡалдырырға, ҡайнатма тәмле еҫле буласаҡ. Әҙерләмәне кәстрүлгә һалып, өҫтөнә сыҡҡансы һыу ҡойорға һәм ҡапҡасын ябып, 20 минут ҡайнатырға. Утты һүндереп, һыуын икенсе һауытҡа ҡойоп алырға. Ҡалын төплө кәстрүлгә 1 кг шәкәр һибеп, өҫтөнә ҡарбуз ҡабығы ҡайнатылған һыуҙың 300-400 миллилитрын ҡойорға - шәкәр сиробы әҙерләү өсөн. Болғата-болғата ҡуйырғансы талғын утта ҡайнатырға. Шуның өҫтөнә ҡарбуз ҡабығын һалырға һәм 1 сәғәт ҡайнатырға, шунан 1 лимон ҡабығын һәм ярты лимондың һутын ҡушып, һыуытырға. Тағы ла 20-30 минут ҡайнатырға. Әҫе ҡайнатманы стерилләнгән банкаларға бүлеп ҡойорға. Ҡарбуз киҫәктәрен һалғанда гәрәбәләй һары сиропты ла күберәк ҡушырға онотмағыҙ. Ҡапҡастар ябып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләмәне юрған ябып һыуытығыҙ.

## Компот

Быны өсөн ҡарбуз йомшағы кәрәк була. Мәҫәлән, етерлек кимәлдә татлы булмаған ҡарбуздан компот ҡайнатырға мөмкин. Ҡарбузды таҙартырға, орлоҡтарын тулыһынса сүпләп бөтөргә тырышырға һәм йомшағын киҫәктәргә бүлеп сығырға. Иң мөһиме, банкаға һыйырлыҡ булһын. Компотҡа 600 грамм ҡарбуз йомшағы, 1,5 стакан шәкәр, 3 стакан һыу кәрәк була. Ҙур булмаған кәстрүлдә һыуҙы ҡайнатып, шәкәр һибергә һәм болғатырға. Уртаса асылған утта 10 минут тотҡас, шәкәрле һыу бер аҙ ҡуйырырға тейеш. Шуға ҡарбуз киҫәктәрен ҡушырға һәм ҡайнап сыҡҡас, уттан алырға, ҡапҡас ябырға һәм 30 минут тоторға. Компотты банкаларға ҡойоп алырға, йәки һыуынғас та эсергә була. Компот бик тәмле килеп сыға һәм уны йәйге тәмле эсемлектәр әҙерләгәндә тотонорға ла була.

## Джем

Йәй тәмен ҡышҡылыҡҡа һаҡлау өсөн иң ҡулай ысулдарҙың береһе - ҡарбуз джемы. Ул ҡуйы килеп сыҡһын өсөн консервациялауҙа ҡулланылған ҡойҡалandырыусы сара - желфикс кәрәк була. Ул шулай уҡ ҡулланылған шәкәр кимәлен дә кәметә. Джем өсөн 1 кг ҡарбуз йомшағы, 500 грамм шәкәр, 50 грамм желфикс, 2 ҡалаҡ лимон һуты кәрәк. Ҡарбуз йомшағын орлоғонан таҙартып, киҫәктәргә бүлергә. Желфиксҡа 4 ҡалаҡ шәкәр ҡушырға һәм шунан кәстрүлгә һалынған ҡарбуз йомшағына өҫтәргә. Талғын утҡа ҡуйып, болғата-болғата ҡайнар хәлгә еткерергә. Батырмалы блендер ярҙамында иҙергә. Шунан тағы бер тапҡыр ҡайнар хәлгә еткереп, ҡалған шәкәрҙе өҫтәргә, болғатырға һәм 36 минут тоторға. Шул арала күбеген алып торорға онотмағыҙ. Иң аҙаҡ лимон һутын өҫтәргә. Джемды стерилләнгән банкаларға ҡойоп сығырға, ҡапҡастарын ябырға. Һыуынғас, ҡарбуз джемы ҡуйыра.

**Ҡарбуз өлгөргән осорҙа тәмлекәстә туйғансы ашап өлгөрөргә тырышыу кәрәк, әлбиттә. Әммә беҙ тәҡдим иткән ысулдар буйынса ҡышҡылыҡҡа ла йәй тәмен һаҡлап ҡалырға булыуын белегеҙ.**

ЙӘЙГЕ СЕЛЛӘЛӘ...

# СМУЗИ ТИГӘНЕ ЛӘ ШӘП!



**Йәй - тәмле-татлы һәм файҙалы емеш-еләк осоро һәм йыл дауамына етерлек витаминдар туплап ҡалыу өсөн уңайлы мәл. Был маҡсатта бөгөн йәштәр араһында бик популяр эсемлек - смузи яһап эсергә лә мөмкин. Ни бары күңелегеҙгә яҡкан емеш-еләк һәм блендер булыу шарт.**

## Бананлы-еләкле көс

Ҡул аҫтында һәр ваҡыт булған емеш-еләктән яһалған смузиға барыһы ла өҫтөнлөк бирә. Был юлы еләк урынына ҡурай еләген ҡулланырға ла була. 2 бананды киҫәктәргә бүлеп, муҡсаға һалырға һәм 15-20 минутҡа туңдырғысҡа тығырға. Блендер һауытына таҙартылған ярты алма, 1 ус еләк, һыуынған бананды һалып, 100 мл һөт һәм 1 балғалаҡ етен майы өҫтәргә һәм туҡырға. Смузиҙы бокалдарға ҡойоп, өҫтәлгә ҡуйырға.

## Емешле смузи

Блендер һауытына 1 стакан ҡарағат, 0,5 стакан мүк еләге, 0,5 стакан ҡара бөрлөгән, 1 семтем мөшкәт сәтләүеге һалып, 100 мл берәй емеш һуты ҡойорға. Мәҫәлән, сейә йәки виноград һуты яҡшы тәм бирә. Бер төрлө булғансы туҡырға. Смузиҙы емештәр менән биҙәп бирергә була.

## Сөгөлдөрлө кәйеф

1 баш сөгөлдөрҙө йыуып, фольгаға төрөргә һәм 180 градус эҫеләге мейескә 20 минутҡа бешерергә ҡуйырға. Шунан һыуытып, өлөштәргә бүлергә. Блендерҙа бешкән сөгөлдөрҙө, 100 грамм ҡурай еләге, 100 грамм ҡара ҡортмәле, 1 ус еләк, 150 мл һыу һәм 1 семтем ванилинды ҡушып туҡырға. Был татлы эсемлекте десерт урынына тәҡдим итергә лә мөмкин.

## Йәшел сәләмәтлек

Йәшелсәләрҙән әҙерләнгән смузи иң файҙалыларҙан иҫәпләнә. Сөнки унда емеш-еләктәрҙәге кеүек шәкәр күп түгел. Бындай смузиҙы әҙерләүҙең бер ысулы: 150 грамм йәш кәбеҫтәне ваҡлап турарға, 2 ҡыярҙы таҙартып ҡырҡырға, 150 грамм ананас һәм шпинат, ваҡланған кинза ҡушып, 150 мл һыуытылған йәшел сәй һәм 50 мл лимон һуты өҫтәп блендерҙа туҡырға.

## Иртәнге ашҡа

Иртәнге аш урынына туҡлыҡлы һәм файҙалы смузи эсергә була. Уны әҙерләү өсөн 4 бөртөк әстерхан сәтләүеген 3/4 стакан мюслиға ҡушып, 100 мл һөт ҡойорға һәм бер нисә минутҡа ҡалдырырға. 2 бананды турап, тәмләткестәр ҡушылмаған 100 мл йогурт менән блендерҙа туҡырға. Шуға йомшарған мюсли менән һөттө өҫтәп, тағы бер ҡат туҡырға. Туҡлыҡлы эсемлекте стакандарға ҡойоп, иртәнге өҫтәлгә ҡуйырға. Уны үҙең менән юлға алырға ла була.

## Һомғолландырғыс сельдерей

Калорийҙар һанаған ханымдарға ла килешерлек смузи бар. Мәҫәлән, 3 киви емешен таҙартып бүлергә, 3 һабаҡ сельдерей менән блендерға һалырға һәм 1 ус шпинат ҡушып туҡырға. 200 мл һыу һәм онталған фенхель орлоғо өҫтәп, тағы бержә туҡып алырға. Эсемлекте бокалдарға ҡойоп, киви бүлкәһе һәм сельдерей ботағы менән биҙәп тәҡдим итергә мөмкин.

## Кипкән емештәрҙән

50-шәр грамм кипкән күрәгә, ҡара емеш, финик, 1 бананды турап, блендерҙа әйләндерергә. Шуға 200 мл кефир (ҡатыҡ та мөмкин) ҡушып, тағы бер ҡат туҡырға.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАСАР ҠУШТАН...

## ил боҙор

Насар арба юл боҙор, насар ҡуштан ил боҙор, насар мулла дин боҙор, насар ҡатын ир боҙор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡыҙ-ҡатын ир кешегә ике осраҡта үпкәләй: унда тик ҡатын-ҡыҙҙы ғына күргәндә һәм унда ҡатын-ҡыҙҙы күрмәгәндә.

**(Константин Мелихан).**

Мөхәббәт бөтһә, бер-береңә өйрәнеү башлана; бер-береңә өйрәнеү бөтһә, хыянат өҫтөнлөк ала.

**(Нинон де Ланкло).**

Илле йәштә бик һирәкләп ике яҡлы мөхәббәт хисе тоҡаныуы мөмкин ул, әммә шул да хәҡиҡәт: был йәштә илле алтынға һәр кем һатып ала ала ул хисте.

**(Байрон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше ҡырағай урман-тауҙар буйлап сәйәхәт итеп йөрөгәндә ораторлыҡ сәнғәте буйынса бәйге ҡорған бер төркөм кейектәргә тап була. Бәйгенең судьяһы ролен үтәүсе арыҫлан кешене үҙенең эргәһенә тамаша ҡылырға саҡыра. Бына бәйге башлана. Иң тәүҙә төлкө һүҙ ала һәм бик матур, шыма ғына итеп һөйләй башлай. Әгәр ҙә уның телмәрен ике һүҙ менән әйтеп биргәндә, уның мәғәнәһе шуға ҡайтып ҡала: ай ҡояшҡа ҡарағанда ҙурыраҡ, тип раҫлай төлкө. Артабан фил сығыш яһай. Уның тауышы ҡеүәтле һәм абруйлы яңғырай. Ә телмәре ике һүҙ менән әйткәндә: "Йәй ҡышҡа ҡарағанда һыуығыраҡ", - тигәнде раҫлай. Юлбарыстың сығышы иң көслөһө һымаҡ тәьҫир итә һәм барыһын да шаҡ ҡатыра. Уның һығымтаһы: "Йылға тау буйлап өҫкә ҡарай аға". Быларҙың барыһын да тыңлап ултырған кеше, түҙмәй, судьяарыҫланға былай ти: "Был кейектәр барыһы ла бынамын тигән оратор. Ләкин мине бер нәмә аптырата: улар барыһы ла ниндәйҙер ялғанды раҫлай. Ә тамаша ҡылыусылар был хаҡта өндәшмәй генә баш ҡаға, ризалаша. Ниңә ораторҙар күрәләтә ялған һөйләй?"**

**- Эйе, был ораторҙарҙың шундай ахмаҡ ҡылыҡтары бар шул, - ти арыҫлан. - Ләкин һеҙ борсолмағыҙ, тамашасыларҙы уларҙың өндәүе-аҡыл һатыуы түгел, күберәк тамаша үҙе ҡыҙыҡтыра. Унан һуң, беҙ бит бындай алама ҡылыҡты һеҙҙән, кешеләрҙән отоп алдыҡ. Һеҙҙең сәйәсмәндәр һәм дин әһелдәре лә бынамын тигән оратор, фекер эйәләре, әммә сәйәсәт тә, дин дә улар өсөн һөнәр, шөғөл генә. Кешеләр уларҙан шулай уҡ ниндәйҙер аҡыллы һүҙ көтмәй, осрашыуға күңел асыу, ваҡыт уҙғарыу, бер аулаҡ урынға ултырып алып, кемдәр ҡуәтүе йә нимәләр тамаша ҡылыу өсөн генә йөрөй. Ә аҡыл асыҡлығына өлгәшеү, донъя, йәшәйеш хаҡында фекер ҡороу, хәҡиҡәт тураһында ишетеүҙе мейеһенә көсөргәнеш тип иҫәпләй. Беҙҙең кейектәр донъяһы ла шул уҡ кешеләрҙе ҡабатлай..."**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# "ЕТЕ ҠЫҘ" - БАЛЕТТА



**Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театры "Ете ҡыҙ" балет спектаклен әҙерләй. Тамаша Өфө ҡалаһының 450 йыллығына арнала.**

"Ете ҡыҙ" - махсус заказ буйынса эшләнелә. Уның нигеҙендә башҡорт халҡының боронғо легендаһы ята. Башҡорт ҡыҙының идеаль образын данлаған поэтик риүәйәтте республика халҡы айырыуса йөрәкһенеп һәм яратып ҡабул итә. Театр сәхнәһендә тәүге тапҡыр ҡуйыласаҡ риүәйәт тамашасыларҙы боронғо осорҙарға алып ҡайтасаҡ. Ул башҡорттарҙың космогоник ҡараштарын сағылдыра: ете һылыу ҡыҙ дейеүҙәр батшаһынан ҡасып тауҙан һикерә һәм һауаға күтәрелә, шунан бирле уларҙы Етегән йондоҙ тип атайҙар. Боронғо риүәйәттең фабулаһына яңы драматик йөкмәтке лә өҫтәлгән: унда мөхәббәткә, батырҙар алышына ла урын бар. Сәхнә әҫәре буйынса балетмейстер, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Ринат Абушахманов, ҡуйыусы-рәссам Альберт Нестеров эшләй. Либретто авторҙары Ринат Абушахманов, Галина Йыһанова һәм Ильмар Әлмөхәмәтов. Балет Өфөнөң 450 йыллығына арналған һәм баш ҡала тамашасыһы уны октябрь айында ҡарай аласаҡ.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# КҮҢЕЛ ТАЙРАНЫ

**Егет-еләң тайыҙ майҙанда аттарҙы сабышҡа әҙерләй. Юртаҡтар араһында тайыҙ бейә лә бар. Майҙанды ла, бейә кеүек йән эйәһен дә һыҙатлаған "тайыҙ" һүҙенә туҡталайыҡ тәүҙә.**

**Тайыҙ.** "Таҡыр" тиһәң дә, "тайыҙ" тиһәң дә мәғәнә үҙгәрмәй икән. *Тайыҙ баш. Тайыҙ юлдан барыу.* Ә малға бәйле иҡенсе осраҡҡа туҡталһаҡ, "тайыҙ" һүҙе "ҡыҫҡа" тигән мәғәнәлә йөнгә ҡарата ҡулланыла. *Тайыҙ бейә (тимәк, ҡыҫҡа йөнлә).*

**Тайран. Тайран итеү.** "Осош" тигәнде белдерә икән. Бейек тайран. Бөркөт тайранын күҙәтеү. "Тайран итеү" - ул, тимәк, осоу. Ҡарлуғас балалары түбәндән генә тайран итә. *Тайран иткәндәй, ҡулдарҙы елпеү.*

**Таҡ.** "Арҡа" һүҙенә тура килгән мәғәнәгә эйә. *Көмбәҙле таҡ. Таҡ аҫтынан үтеү.* Һәм тағын да "тәхет" һүҙе урынына ла йөрөй алған һүҙ ул "таҡ". *Таҡҡа үрләү. Батша тағы. Таҡ өсөн көрәш.*

**Таңһыныуҙың мәғәнәһе** - нимәгәлер һоҡланыу, таң ҡалыу. *Тәбиғәтебеҙгә таңһыныу. Таңһыныуҙан балаға күҙ теймәһен.*

**Таңыу.** Кемделәр һыйлап оҙатыу тураһында шулай тиҙәр. *Таңыу өсөн аш-һыу әҙерләү. Ҡунаҡтарҙы таңыу кәрәк.*

**Шулай итеп, һәр кемгә күңел тайранын йышыраҡ кисерергә яҙһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәррирәт: Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1196